ISSN 0869-5008

# АМАНАТ

2010
Сентябрь



# Донья мәғлүмәтләнен ҡулында

Республика йылы 1990 2010 Год Республики

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!



## Ҡортсолар сылбыры

Ишембай ҡыҙы Гөлназ Шәңгәрәева былтыр Ейәнсурала үткән республика «Йәш ҡортсолар» бәйгеһендә икенсе урын алып ҡайтып, яҡташтарын һөйөндөргәйне. Ә быйыл был мәртәбәле конкурс уларҙың үҙҙәрендә, Байғужа ауылы янындағы “Йондоҙсоҡ” балалар һауыҡтырыу лагерында үтте. Гөлназ уға йыл буйы ныҡлап әҙерләнде. Үҙ районында үткән ярышта еңеүҙе кемгәлер биреп ебәреп булмай бит инде. Нисек булһа ла тырышырға кәрәк. Һәм ҡыҙ үҙ һүҙен һүҙ итте.

Бәйгелә 39 районда 45 бала ҡатнашҡайны. Шулар араһында Ишембайҙағы 2-се Башҡорт республика гимназия-интернатының 11-се синыф уҡыусыһы Гөлназ Шәңгәрәева иң көслөһө тип табылды. Ул – еңеүсе.

Был конкурста Гөлназдың туғыҙынсы синыфта уҡыған бер туған ҡустыһы Илфат та ҡатнашҡайны. Әлегә призлы урын алмаһа ла, ошондай конкурста ҡатнашҡаны өсөн дә бәхетле ул. Ә еңеүгә килгәндә, бөтәһе лә алда әле уның. Былтыр аталары беренсе урын алғайны, быйыл – апаһы. Тимәк, өлгө алырҙай кешеләре бар тигән һүҙ.

**Хәлиҙә ЧЕМБАРИСОВА.**



## Яҙылып та өлгөргәндәр!

2011 йылдың тәүге ярты йыллығына подписка башланыу менән, беҙгә хаттар килә лә башланы. Йылайыр районының Юлдыбай урта мәктәбенең 3-сө синыф уҡыусылары, мәҫәлән, синыф етәксеһе, Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, юғары категориялы уҡытыусы Нәзирова Венера Фуат ҡыҙы менән бергә “Аманат”ҡа яҙылып, фотоға төшөп, электрон почтаға һалып та өлгөргәндәр. “Киләсәктә, өлкән синыфтарҙа ла, яратҡан журналыбыҙҙан айырылмаҫҡа, уның тоғро дуҫтары булып ҡалырға теләр инек”, – тигәндәр улар хаттарында һәм башҡаларҙы ла үҙ миҫалдарына эйәрергә саҡырғандар.

Рәхмәт һеҙгә!

2010 Уҡытыусы йылы




## Ҡотлайбыҙ!

“Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!” бәйгеһе тамам. Май – август аҙағында сығарған сәғәт өлөшсәләренән тулы сәғәтте беҙгә иң тәүҙә Күмертау ҡалаһынан Илүзә Харрасова ебәрҙе. “Мин 3-сө БРГИ-ның бишенсе синыфында тик “бишле” билдәләренә генә уҡыйым, “Аманат” – яратҡан журналым”, – тип яҙа Илүзә беҙгә.

Тимәк, бәйгебеҙ шарттарына ярашлы, ул “Аманат”тың фирма сәғәте менән бүләкләнә.

“Аманат” ваҡыты менән йәшәгеҙ!

## Остаздарға оло ихтирам

Стәрлетамаҡ ҡалаһының Коммунистик урамында урынлашҡан 31-се мәктәп алдында беренсе уҡытыусыға һәйкәл асылды. Уның авторҙары Рөстәм Хәсәнов, Радик Хәсәйенов һәм Владимир Харжевский Уҡытыусы образын кескәй баланы етәкләп, оло тормош юлына алып сығыусы образында күргән. Рәсәйҙә әле Уҡытыусы образ булараҡ металда һынландырылғаны юҡ ине.



МАТБУҒАТ-2011

# «Яҙыл да, бүләк от!»

**Иғтибар! Башланды!!!**

**Сентябрҙән 2011 йылдың беренсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу башланды.**

**«Аманат»ҡа Рәсәйҙең бөтә төбәктәрендә лә яҙылырға була.**

**Ярты йылға яҙылыу хаҡы – 134 һум 28 тин.**

**Индексы – 73317**

Беҙҙең e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru
















* Комплектация и модели призов и подарков определяются редакцией самостоятельно и могут быть изменены (внешний вид приза и подарка, указанного на странице, может отличаться от реального).

## Хөрмәтле уҡыусылар!

**Йылда үткәрелеп килгән “Яҙыл да, бүләк от!” уйынын тағы ла иғлан итәбеҙ. Уның шарттарына ярашлы, һеҙгә журналға яҙылырға һәм ошо купонды тултырып, декабргә тиклем редакцияға ебәрергә кәрәк.**

**Конкурсҡа йомғаҡ киләһе йылдың ғинуар айында яһаласаҡ һәм бүләктәр – велосипед, телефон, фотоаппарат, магнитофон һәм “Аманат”тың стена сәғәте – һәр кемгә алып барып тапшырыласаҡ.**

**“Аманат” журналына яҙылығыҙ ҙа, ярты йыл буйы килеп торасаҡ ҡыҙыҡлы журналды алдырып уҡыуҙан тыш, ҡиммәтле бүләк тә отоғоҙ!**

## АМАНАТ 2011

Исемегеҙ______________________________

______________________________________

Фамилияғыҙ____________________________

______________________________________

Атайығыҙҙың исеме_____________________

______________________________________

Уҡыған мәктәбегеҙ______________________

______________________________________

Синыфығыҙ_____________________________

______________________________________

Адресығыҙ_____________________________

______________________________________

______________________________________

Тиҫтерҙәрен ижады

# ДУМБЫРА СИРТӘ КЫҘҘАР



**Өфөлә йәшәүсе Ҡылысовтар ғаиләһендә Гөлйемеш һәм Гөлгөнә исемле һылыу һәм һәләтле кыҙҙар үҫә.**

**Был ғаилә күп тапҡырҙар республика бәйгеләрендә лә үҙҙәрен һынап ҡараны. Уңыштары байтаҡ уларҙың.**

**Өфөлә үткән сәсәндәрҙең беренсе ҡала бәйгеһендә “Ғаилә ҡото” номинацияһында еңделәр, Өфөнөң Ленин районында уҙған “Шәжәрә” бәйгеһендә 2-се урын яуланылар. Республикабыҙҙа үткән Ғаилә йылы уңайынан ойошторолған “Ижади ғаиләләр” бәйгеһендә Гран-приға лайыҡ булдылар. Ә, Гөлйемеш менән Гөлгөнә күптән түгел, “Башҡортостан балалары” тип аталған Президент программаһы сиктәрендә ойошторолған “Баҫкыстар” республикала һәләтле балалар бәйгеһендә еңеү яуланы. Өфөнөң Затон биҫтәһендә урынлашҡан 128-се мәктәбендә Гөлйемеш алтынсы, Гөлгөнә бишенсе синыфта укый. Улар Әҙеһәм Исҡужин исемендәге 9-сы музыка мәктәбендә фортепьяно класында ла шөғөлләнәләр. Үткән уҡыу йылынан, өҫтәлмә музыка ҡоралы ингәс, апалы-һеңлеле Гөлйемеш менән Гөлгөнә думбыра кылдарын да сиртә. Бейеү һәм йырлауҙан тыш, Гөлгөнә шиғырҙар ҙа яҙа. Был сығарылышта уның ижади емештәрен тәкдим итәбеҙ.**

## УКОЛ

Уколдан ҡурҡа кешеләр, –
Бала ҡурҡа, ат ҡурҡа.
Нисек ҡурҡмаһын, ти, кеше,
Тауҙай ат ҡурҡҡан сакта?

## АУЫЛҒА

Әсәй әйтә, ауылда,ти,
Өләсәй себеш көтә.
Шул себештәрҙе ҡарарға
Беҙҙе ярҙамға көтә.

## ҠАЙЫН

Тәҙрәмдең алдында,
Һап-һары ҡайын тора.
Ниңә һарғайҙы икән, – тип
Бар ҙа үҙенән һора!
Шул ҡайындың ҡырында-
Ҡыҙарып бешкән миләш.
Эй, ҡайынкай, ҡайғырма!
Янында бит бар, серҙәш...
Был урмандың матурлығын
Ҡарай-ҡарай хәл бөтә.
Был донъянан, бар балалар
Якшылыҡ ҡына көтә.

## ФЕСТИВАЛЬ

**/Баҫкыстар” шиғриәт фестиваленән һуң.../**

Беҙ ҡатнаштыҡ
фестивалдә,
Бик күп фәһемдәр алдыҡ.
Ҡулда – диплом,
Ә күңелдән
Ҡәнәғәт булып ҡалдыҡ!
Йыышырак
булһын фестиваль,
Беҙ шиғырҙар яҙырбыҙ.
Киләсәктә беҙ ҙә, бәлки,
Шағирәләр булырбыҙ.
Эх, фестиваль,
матур байрам,
Балкыт яңы йондоҙҙар!
Киләсәк өсөн әҙерлә
Батыр егет һәм ҡыҙҙар!

## СӘХНӘ

Сәхнәгә менеп баҫһам,
Ҡурҡып ҡына йырлайым.
Кире сәхнәнән төшһәм,
Мин – йондоҙ, тип уйлайым.

***

**Билдәле шағирә Кәтибә Кинйәбулатова инәйҙә ҡунакта**

Мин Кәтибә инәйҙәргә
Ҡунаҡҡа барған инем.
Уны күреү тураһында
Шиғыр ҙа яҙып ҡуйҙым.

Кәтибә инәйҙең исемен
Кем генә инде белмәй?
Яҙған китабын бер асһаң,
Хатта ябаһы килмәй.

Кәтибә инәй түшендә
Миҙалдар яна, ана.
Әйтерһең һуғыш йылының
Йәштәре шулай тама.

Мин уйнайым думбырала
Ә ул – мандолинола.
Шиғырҙан йыр, күрәһең,
Шулай итеп ярала.

**ҺҮРӘТТӘ: Гөлйемеш менән Гөлгөнә Ҡылысовтар.**

# МӨҒЖИЗӘЛЕ КАРТА

**(Әкиәт)**

Борон-борон заманда йәшәгән, ти бер ярлы бабай. Унының әбейе үлеп киткән. Бабай үҙе донъя көткән. Бер көндө ул ғәжәп ҡыҙыҡ карта тапҡан. Унда былай тип яҙылған: “Нимә кәрәк – яҙырһың, шуны миндә табырһың, кәрәгенсә алырһың, тыйнаҡ ҡына булырһың”.

Бабайҙың байығыһы килгән. Картаға былай тип яҙған: “Байығым килә”. Картала нөктә сыға. Бабай карта күрһәткән ергә бара һәм байлыҡ таба.

Икенсегә ул картаға былай тип яҙған: “Матур өй кәрәк”. Карталағы күрһәтелгән нөктәлә матур өй ҡалҡҡан.

Өсөнсөгә былай тигән: “Ауыл хужаһы булғым килә”. Бабай ауыл хужаһы була һәм бөтә ауыл унығы була.

Дүртенсегә былай ти: “Бөтә илдең хужаһы булғым килә”. Картала шундай яҙыу сыға: “Нимә кәрәк алырһың, тыйнаҡ ҡына булырһың, тигәйнем һиңә”.

Ошонан һуң бабайҙың байлығы ла, өйө лә юҡҡа сыҡҡан. Ниндәй кеше булһаң да, һәр нәмәлә сама белергә кәрәк шул, туғандар.

**Айгиз АҠБАШЕВ.**
**Ейәнсура районы,**
**Новониколаевка мәктәбе.**

# БОЛАН

**(Әкиәт)**

Борон-борон заманда йәшәгән, ти бер болан. Унын шул тиклем матур һарғылт бер туны булған. Ул йәшәгән урманда барлыҡ хайуандар ҙа бар, ти. Боландың иң яҡын дуҫы төлкө, ти. Төлкө уның менән дуҫлашһа ла, көнләшкән, ти, боландың тунына. Ундай тун бер хайуанда ла булмаған, ти.

Шулай көн күреп ятҡанда, болан эргәһенә төлкө килгән дә: “Әйҙә һыу инергә,” – тигән. Болан риза булған. Улар һыу буйына килеп еткәс, төлкө тиҙ генә һыуға төшөп киткән. Һәм башына хәйләкәр бер уй килгән. Ул яйлап ҡына йылғаның уртаһына килеп еткән дә, батҡан булып ҡылана башлаған, ти. Төлкө ҡысҡырған була, ти: “Ҡотҡарығыҙ, ҡотҡарығыҙ!” Болан тиҙ генә һарғылт тунын сискән дә, төлкөгә ярҙамға ашыҡҡан, ә төлкө батҡан булып һыуға сумған да, һыу аҫтынан йөҙөп киткән. Болан уны әй эҙләгән, әй эҙләгән, тик таба алмаған.

Шунан яр буйын ҡараһа, туны юғалған, ти. Ул төлкө өсөн дә, туны өсөн дә нык илаған. Болан һыуҙан сыҡҡан да, юл буйлап китеп барғанда, бөтә йәнлектәр ҙә былай тип һорағандар: “Ни булды, болан? Ҡайҙа матур һарғылт туның? Ни өсөн илайһың?” Болан илай-илай яуап биргән: “Илайым инде. Төлкө дуҫым һыуға батты, туным юғалды”.

Ул хәбәрҙе тиҙ генә айыуға алып барып еткерәләр. Айыу боланға былай, ти: “Һин төлкөгә ни эшләп ышанаһың инде? Ул һине алдаған бит”. Болан ышанмаған.

Бер ваҡыт болан төлкөнө үҙенең туны менән күреп ҡалып, бик рәнйегән. Һәм ул был урманды ташлап бик алыҫҡа киткән. Бына шуның өсөн беҙ боландарҙы бик һирәк күрәбеҙ. Ә төлкә шул матур тунды кейеп, хәҙер ҙә хәйләкәр, алдаҡсы булып ҡалған.

**Лидия БИКТИМЕРОВА.**
**Баймаҡ районы,**
**Яңы Таһир ауылы.**



# Афарин, Эльвира!

Әхирәтем Эльвира Рәхмәтуллина менән 5-се синыфта уҡыйбыҙ. Ул – бик тырыш, аҡыллы ҡыҙ. Бөтә фәндәрҙән дә тик яҡшы билдәләргә өлгәшә. Мәктәп тормошонда ғына түгел, район, төбәк-ара һәм республика кимәлендә үткән төрлө сараларҙа ла ихлас ҡатнаша, еңеү яулай. Район гәзитендә уның төрлө темаға яҙылған шиғырҙары, һүрәттәре баҫылып тора. Әхирәтем “Тамсылар” йыр ансамблендә лә шөғөлләнә.



Эльвираның портфолиоһын күрһәгеҙ, иҫегеҙ китер: ниндәй генә маҡтау ҡағыҙы, диплом һәм сертификаттар юҡ! Мәҫәлән, районда экологик плакат конкурсында, “Тәбиғәт – беҙҙең өй” темаһына һүрәт төшөрөп, гран-при яулаһа, “Открытка – 2009” конкурсында икенсе урынға лайыҡ булды. Рәсәй кимәлендә Обнинск ҡалаһында уҙған конкурсҡа үҙенең эшен электрон почта аша ебәреп, “Тирәяҡ мөхит” номинацияһында 97 мәрәй йыйып, лауреат исеме алды. Тағы Эльвира “Баҫҡыстар” асыҡ төбәк-ара конкурс-фестивалендә ҡатнашып, II дәрәжә диплом менән бүләкләнде. Уның уңышына бөтөн синыф менән ихлас һөйөндөк.

Афарин, Эльвира! Киләсәктә лә яңы бейеклектәр юлдаш булһын!

**Илгизә АТАНОВА,**
**Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының**
**2-се урта мәктәбе уҡыусыһы.**
**ҺҮРӘТТӘ: Эльвира Рәхмәтуллина.**

# Минең атайым

Атайымдың исеме – Камил. Ул талапсан, иғтибарлы, эшлекле һәм изге күңелле кеше. Күп һөйләмәй, сабыр холоҡло, ирҙәрсә баҫалҡы, йөҙөндә һәр саҡ яғымлы йылмайыу.

Оҙаҡ йылдар “Ыҡ” кулланыусылар йәмғиәтендә водитель булып эшләй. Үҙ эшен яратып башҡара. Беҙ, өс балаһы, уны бик яратабыҙ. Ул да беҙҙән йылы һүҙҙәрен, һөйөүнаҙҙарын йәлләмәй.

Атайымдың ҡулы ла оҫта. Ниндәй генә эшкә тотонһа ла, бына тигән килеп сыға. Атайымды ауылыбыҙҙа барыһы ла ихтирам итә. Беҙ ҙә бар яҡлап уға оҡшарға тырышабыҙ.

**Эльмира ХӨСНӨТДИНОВА,**
**Балакатай районының**
**Түбәнге Үтәш урта мәктәбе**
**уҡыусыһы.**

# Мин ғашиҡмын һиңә, Башҡортостан!



Тыуған яҡ! Башҡортостаным! Урман, тәбиғәт!

Ниндәй оло мәғәнәгә эйә был һүҙҙәр! Башҡортостандың ҡайһы төбәгенә, тау-йылғаһына күҙ һалма, улар берәй легенда, йә тарихи хәл-ваҡиға менән бәйле. Урал тауын ғына алһаҡ та, күпме тарих, легенда һаҡлана.

Урманға сыҡһаң, ни генә юҡ: ағасы ла, шифалы үләне лә, ҡиммәтле тиреле йәнлектәре лә. Урман дым тота, ҡаты елдәрҙән һаҡлай. Туҙанлы юл, тәтөнлө урам кеше сәләмәтлеге өсөн ауыр, ә урманда уларҙың береһе лә юҡ. Сөнки йәшел япраҡтар кислород бүлеп сығара, туҙанды үҙенә тарта, һауаны таҙарта. Шулай итеп тәбиғәт – тыуған илебеҙҙең иң мөһим байлыҡтарының береһе. Ағастарҙы ғына алайыҡ. Кешеләр унан бик күп меңләгән төрлө әйберҙәр һәм продукттар алырға өйрәнгән. Ғалимдар уның файҙалы яҡтарын һаман аса әле. Аҡ ҡайынды ғына алһаҡ та, кем генә һоҡланмай уға! Был зифа буйлы ағас – тәбиғәт биҙәге, матурлыҡ символы. Уның файҙаһын һанап бөтөрөрлөк түгел.

Тәбиғәттә бөтә нәмә лә бер-береһенә бәйләнгән. Ағастар булмаһа, коштар яҙ һайын осоп ҡайтмаҫ ине. Ағастарҙы һындырһаҡ, улар ҡорор, үҫемлектәрҙе өҙһәк, үҫмәҫ ине. Шуға ла бит шифалы үҫемлектәрҙе ҡырҡып ҡына йыйырға кәрәк. Төбө-тамыры менән йолҡоп алһаҡ, улар йылдан-йыл кәмей. Бөтә ҡағиҙәләрҙе үтәһәк кенә тәбиғәте-

беҙ матур, һауабыҙ таҙа булыр. Шуға ла, үҙебеҙҙең матур киләсәгебеҙҙе булдырырға теләйбеҙ икән, тәбиғәтебеҙҙең матурлығын, ҡоштарҙың һайрауын, донъяның бөтөнлөгөн дә һаҡларға тейешбеҙ.

Һәр төбәктең тәбиғәте үҙенсәлекле, ҡабатланмаҫ. Ә беҙҙең район, республикабыҙҙың иң матур мөйөштәренең береһе булараҡ, территорияһында составы буйынса төрлө минераль сығанаҡтар, шишмәләре күплеге менән дә данлана.

Элек-электән маҡталып килгән ҡалын-ҡалын урмандар, зәңгәр күлдәр, көмөш һыулы шишмәләр, балыҡтар йыр-шиғырҙарҙа ғына ҡалмаһын ине. Тыуған ерҙе яратыу, тәбиғәтте маҡтап, уға һоҡланып шиғыр яҙыу ғына түгел ул. Яратыу хисе тәрәнерәк. Ул тирәяҡтағы байлыҡтарҙы: урманды, үҫемлектәрҙе, ҡоштарҙы, ер һәм һыуҙы әрәм-шәрәм итеүҙән, бысратыуҙан һаҡлау тигән һүҙ.

Районыбыҙ тереклек донъяһына ла бай. Айыу, мышы, ҡабан сусҡаһы, һыуһар, көртлөк, урман тауыҡтары бар.

Һәр кемгә лә үҙенең Тыуған иле, ере, һауаһы, ғәзиз тупрағы яҡын һәм ҡәҙерле. Миңә лә шулай. Юҡҡа ғына күренекле башҡорт шағиры Хәниф Кәрим:

***Кислородһыҙ***
***йәшәп булмағандай,***
***Мин был илһеҙ***
***йәшәй алмайым,***
– тимәгәндер.

Тыуған ерем күге һәр саҡ тыныс булһын! Урман, йылға, шишмәләребеҙ ҡоромаһын, йәнлектәр, ҡоштарыбыҙ донъяға йәм бирһен. Янғындар сыҡмаһын. Баҡсаларыбыҙ сәскәгә күмелһен, мул уңыш бирһен, иген баҫыуҙарыбыҙ ишелеп уңһын.

**Айгөл МӨХӘМӘТНУРОВА,**
**Асҡын районының**
**Ҡарткиҫәк мәктәбе**
**уҡыусыһы.**

# “Йондоҙло юл”

Баш ҡаланың Киров районында икенсе йыл инде “Йондоҙ” үҫмерҙәр клубы уңышлы эшләп килә. Бында үҙеңде төрлө яҡлап асырға, ижади йәһәттән камиллашырға мөмкинлектәр күп. Төрлө-төрлө түңәрәктәрҙә һынай үҙҙәрен хыялдарын ысынбарлыҡҡа әйләндерергә теләүселәр. Бигерәк тә иғтибарҙы “Йондоҙло юл” исемле вокал-хореография студияһы йәлеп итә.

Донъяла киң таралған ике сәнғәт төрөн үҙ эсенә алған был студия алтмышлаған ҡыҙ һәм егетте берләштерә. Художество етәксеһе Лилиә Солтангәрәй ҡыҙы Баярс әйтеүенсә, бында 7 йәштән 25 йәшкәсә һәләтле йәштәр, бер нисә төркөмгә бүленеп, шөғөлләнә. Күпселекте ҡыҙҙар тәшкил итә, һәр төркөмгә ике-өс егет тура килә. Йәш талантттарға вокал серҙәрен “Һары ботинкалар” Асыҡ республика конкурс-фестиваленең директоры булған тәжрибәле педагог Лилиә Солтангәрәй ҡыҙы үҙе төшөндөрһә, бейеү сәнғәтен үҙләштерергә Елена Сергеевна Горбунова ярҙам итә. Бында “Алтынташ”, “Тылсымсылар”, “Кады-мады” шоу-төркөмдәре, триолар һәм дуэттар ҡанат нығыта; солистар ҙа байтаҡ ҡына. Дәрестәр ябыҡ кластарҙа күнегеүҙәр эшләү, тауышты ҡуйыу, хәрәкәттәр өйрәнеүгә генә ҡайтып ҡалмай, ә маҡсаттар юғары – төрлө бәйгеләрҙә ҡатнашып, еңеүселәр рәтен арттырыу,



ҙур сәхнәләрҙе яулау. “Йондоҙло Ҡырым”, “Күңелле карусель” (Одесса ҡалаһы), “Алтын әтәс” (Түбәнге Тагил) конкурстарында уңышлы сығыш яһай студияла шөғөлләнеүселәр. Үҙебеҙҙә үткәрелеп килгән “Аҡ һыуһар”,

“Башҡортостан йондоҙсоҡтары” һәм башҡа бик күп бәйгеләрҙең даими ҡатнашыусылары улар. Мәҫәлән, Катя Ямщикова Болгарияла һәм Мәскәү Кремлендә үҙ һәләттәрен күрһәтә.

Репертуарҙы төрлө халыҡтарҙың күңел көҙгөһөнә әүерелгән моңло йырҙары, хис-тойғоларын сағылдырыусы дәртле бейеүҙәре байыта. Студия ағзалары аҙнаһына кәмендә ике концерт, театрлаштырылған тамаша ҡуя. Йәш артистарға Рәсәй йондоҙо Эдита Пьеха менән дә сығыш яһау бәхете тейгән. Ата-әсәләр менән дә тығыҙ бәйләнеш булдырылған, һәр башланғыс улар йәһәтенән хупланып ҡаршы алына, гелән ҡуш ҡуллап ярҙам итергә әҙер торалар.

Бына шулай аныҡ маҡсаттар ҡуйып, “Йондоҙло юл” ағзалары киләсәккә яҡты өмөттәр бағлап йәшәй.

**Миләүшә ҠАСИМОВА.**
**ҺҮРӘТТӘ: “Йондоҙло юл” студияһы ағзалары.**

# “Юлдаш” һөйләй, “Юлдаш” йырлай

**Башҡортостанда олоһо ла, кеçеһе лә яратып тыңлаған бер радиоканал бар. Ул да булһа – тәүлек әйләнәһенә FM йышлыктарында эшләүсе “Юлдаш” йыр-моң һәм мәғлүмәт каналы. Иртән уянғас та радиоалғысты ҡабыҙып, әүен баҙарына киткәнсе ошо каналды тыңлап, йәненә ял алып, көнө буйына күтәренке рухта йөрөүсе кешеләр бихисап. Иң мөһиме, “Юлдаш”ты Башкортостан халкы ғына түгел, ә Ырымбур, Силәбе, Пермь, Төмән өлкәләрендә һәм Татарстанда ла яратып тыңлайҙар. 2007 йылдан бирле, интернетка инеп, on line режимында тыңларға, ер шарының теләһә ҡайһы мөйөшөнән тура эфирға сығып һөйләшеүҙә ҡатнашырға, үҙ фекереңде белдерергә мөмкин.”Америка, Испания, Италия һәм башҡа илдәрҙәге милләттәштәребеҙҙең даими бәйләнешкә инеүе – ғәҙәти хәл”, ти ундағы журналистар.**

Башҡортостан дәүләт радиоһы базаһында 2000 йылдың 25 сентябрендә барлыҡҡа килгән был канал, һәр кемдең зауығына тап килерҙәй төрлө тематик тапшырыуҙар әҙерләп, тыңлаусылар күңеленә юл яра. Ғәҙәттә, сәғәт башында яңылыктар хеҙмәте әҙерләгән һуңғы хәбәрҙәр тәкдим ителә, шунан автор тапшырыуҙары, радиоуйындар, конкурстар, радиоһөйләшеүҙәр ойоштоpола, былар барыһы ла йыр-моң, музыка менән бергә үрелеп барыла. Ярты сәғәт һайын һауа торошо менән таныштыралар.





“Юлдаш” каналының ун йыллыҡ юбилейына арнап, һәүәҫкәр йырсылар араһында “Юдаш йыры” конкурсы иғлан ителеүе лә йыр-моң һөйөүселәр өсөн бик ҙур бүләк булды. Конкурс талабы буйынса ҡатнашыусылар өс йыр: патриотик темаға, халыҡ һәм эстрада көйөн яҙҙырып тәкдим итергә тейеш. Шулай итеп, радио хеҙмәткәрҙәре 70 йыл буйы музыка фондында һаҡланған йырҙарҙы, эстрадаға яңы аяк баҫыусы йәштәрҙең ижадын тыңлаусыларға еткереү менән генә сикләнмәй, ә ябай халыҡ араһынан да таланттар эҙләүҙе дауам итә. “Конкурсҡа килгән музыкаль яҙмаларҙан иң матурҙарын һайлап радио тыңлаусыларға тәкдим итәбеҙ. Әйтергә кәрәк, араларында тәбиғи моңо менән күңелдәрҙе арбарлыҡ гәүһәрҙәр осрай. Октябрь айында Өфөлә “Юлдаш”ҡа – 10 йыл” тигән ҙур кисә үткәрергә уйлайбыҙ. Шунда конкурсанттарҙы ла саҡырып, тантаналы шарттарҙа диплом, бүләктәр бирмәксебеҙ. Юбилей айканлы быйыл республика райондары буйлап “Беҙ бергә!” тигән концерттар менән йөрөнөк. Ҡайҙа ғына барһаҡ та, йәнле аралашыуға һыуһаған халыҡ беҙҙең менән осрашыуҙарға эркелешеп килде. Шөкөр, йырсыларҙы әллә ҡайҙан эҙләйһе түгел. Популяр йырсылар үҙҙәре беҙҙә эшләй. Мәҫәлән, Нурия Абдуллина, Зифа Нагаева, Резеда Әминева, Фәрүәз Урманшин, Венера Рәхмәтуллина, Рәил Өмөтбаев, – тип һөйләй Башҡортостан радиоһының баш мөхәррире Тәнзилә Үлмәҫбаева.

Радио тапшырыуҙарын алып барыусылар ҡайҙа һәм нисек әҙерләнә һуң? Әгәр филология йә журналистика бүлеген тамамлап, бында киләһең дә, бер нисә көндән эфирға сығаһың, тип уйлаусылар булһа, төптә яңылыша. Бактиһәң, ярты йыл тирәһе тәжрибәле дикторҙар һине телмәр тоторға, дикция өҫтөндә эшләргә өйрәтә. Аҙаҡ микрофон менән эш итергә өйрәтәләр. Алып барыусы шулай уҡ музыкаль базаны ла яҡшы белергә тейеш, был осраҡта инде тауыш режиссерҙары ярҙамға килә. Алып барыусылар өсөн иң ҙур талап – тауыштың эфирға ятышлы булыуы. Әлбиттә, телде яҡшы белеү, яҙыу-һыҙыуға оҫталыҡ та ҡарала. Сөнки алып барыусыларҙың барыһы ла теманы һайлап, үҙҙәре тура эфирҙа әңгәмә ойоштора, шылтыратыуҙар ҡабул итә, радиотыңлаусылар менән бәйләнешкә инә. Шуға күрә тура эфирҙың уңышлы килеп сығыуы тик алып барыусыға бәйләнгән.

– “Юлдаш”та бик татыу, егәрле коллектив тупланған. 50-ләп рубрика, 80-гә яҡын тапшырыу сыға каналда. Хеҙмәткәрҙәрҙең ҡайһыһын алып ҡараһаң да, тик йылы һүҙ әйтергә мөмкин. Бөгөн “Юлдаш”ты һәр башҡорт-татар ғаиләһендә көтөп алалар. Мәҫәлән, Нурия Абдуллина менән Зифа Нагаева әллә ҡасан инде һәр өйҙә үҙ кешегә әйләнгән. Нурия Абдуллинаның “Ҡунаҡ өй”өнә тыңлаусылар һәр саҡ ашҡынып “килә”. Миләүшә Ғәлиева әҙерләгән “Һөйөнсө, бәпес тыуҙы!” тапшырыуы ла оҙон ғүмерле булып сыҡты. Сөнки был тема мәңгелек, бәпестәр көн һайын тыуып тора бит. Өлкән инәйҙәр, апайҙар яңы кешенең доньяға тыуыуын ҡыуанып хәбәр итергә ашыға, ошо айҡанлы бер-береһенә ҡотлау сәләмдәре ебәрә, – ти Тәнзилә Абдулла ҡыҙы. Йәштәрҙең зауығын иҫәпкә алып булдырылған “Аулаҡ” тапшырыуын да бик күптәр көтөп ала. “Аулаҡ”ҡа саҡырыусыларҙың береһе – Марсель Байдәүләтов радиола бишенсе йыл эшләй. БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетын тамамлаған.





“Беренсе курсты тамамлағанда радионан алып барыусыларға конкурс иғлан ителеүен ишетеп ҡалдым. Туҡта әле, үҙемде һынап ҡарайым, бәлки, эшкә урынлашып, аҙмаҙ булһа ла аҡса эшләп булыр, тип билдәләнгән көндә телеүҙәккә барҙым. Ике турҙы үтеп, бер аҙҙан эш башланым. Тормошон радионан башҡа күҙ алдына ла килтермәгән ихлас, оло йөрәкле хеҙмәткәрҙәргә тиҙ ылыҡтым. Эшемде яратам, һәр эфирға яҡшы кәйефтә сығырға тырышам. Әлбиттә, өйрәнгәнсе байтаҡ ҡына ваҡыт үтте. Ярты йыл тирәһе барыбер тауыш ҡалтырай, тулҡынланыу була. Телевидениела ла үҙемде һынап ҡараным, әммә радиоға һөйөү көслөрәк булып сыҡты, күрәһең”, – ти Марсель. “Алып барыусы ниндәй сифаттарға эйә булырға тейеш?” – тигән һорауға ул: “Иң беренсе сиратта һүҙ байлығы кәрәк, шунан иһә төрлө яҡтан мәғлүмәтле булыу мотлаҡ. Тапшырыу ваҡытында бит эфирға кемдәр генә шылтыратмай?! Шуның өсөн беҙ ниндәйҙер кимәлдә психолог ролен дә үтәргә тейешбеҙ. Алып барыусы бәйләнешкә инеүсе һәр кеше менән уртаҡ тел табырға бурыслы”, – тип яуапланы.

Тәүлек әйләнәһенә башҡортса эшләгән, башҡорт моңон пропагандалаған канал киләсәктә лә изге юлынан тайпылмаһын, ниндәй генә үҙгәрештәр булһа ла, иң мөһиме, башҡортса яңғыраған тапшырыуҙарға хилафлыҡ килерлек булмаһын.

Юбилейың ҡотло булһын, “Юлдаш”! Һин һәр саҡ беҙгә ышанысլы юлдаш!

**Нурия ӘХТӘМОВА.**

**ҺҮРӘТТӘРҘӘ: баш мөхәррир Тәнзилә Үлмәҫбаева, журналистар Рәсүл Сәғитов һәм Азамат Нуриев; музыкаль мөхәррир Риф Арыҫлан; алып барыусылар Марсель Байдәүләтов (аҫта) һәм Наил Юнысов.**

# БАШҠОРТ ХАЛҠЫНЫҢ БӨЙӨК ШАҒИРЫ ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧТЫҢ НӘҪЕЛ ШӘЖӘРӘҺЕ

Башҡорт халҡының бөйөк шағиры Шәйехзада Бабичтың тамырҙары Мишкә районының Ҡыйғаҙытамаҡ ауылына барып тоташа. Уның атаһы Мөхәмәтзакир хәҙерге Дүртөйлө районының Әсән ауылына мулла итеп ебәрелгәс, 1895 йылдың 2 ғинуарында ошо ауылда тыуған Шәйехзада, үҙ дәүеренең үтә ҡатмарлы ташҡындарында ҡайнап йәшәп, 1919 йылда хәҙерге Йылайыр районында фажиғәле һәләк була. Әммә ҡыҫҡа ғүмере эсендә ул башҡорт әҙәбиәтенең сағыу йондоҙо булып балҡырға өлгөрҙө.






**Ырыуы – Ҡаңлы**

**Ағасы – Ерек**

**Ҡошо – Торна**

**Ораны – Туҡһаба**

**Тамғаһы – Т (ҡапҡа)**

Бөйөк еңеү

# ЕҢЕҮСЕЛӘРҘЕҢ БЕРЕҺЕ...



Минең ҡартатайым Уразбаев Ғәрифулла Ғәбәй улы 1939 йылда Стәрлетамаҡ педагогия техникумын тамамлағас, бер йыл уҡытыусы булып эшләп өлгөрә һәм Ҡыҙыл армия сафына алына. Күп тә үтмәй, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Авиамәктәптә уҡсы-радист һөнәренә эйә булған ҡартатайым һауа алыштарында ҡатнаша, төрлө хәрби заданиелар үтәй. Фашистарҙың күп истребителдәрен атып төшөрә, алғы фронтта дошмандарҙың техника һәм башҡа көстәрен шартлата. Үҙенең янған самолетынан өс тапҡыр парашют менән һикереп ҡотола. 1943 йылда Курск-Орел һуғышында, 1-се, 2-се Украина, Белоруссия фронттарында, Польша, Венгрия, Болгария ҡалаларын азат итеүҙә, Берлинды штурмлауҙа ҡатнаша. Ике тапҡыр “Ҡыҙыл байраҡ” ордены һәм башҡа миҙалдар менән бүләкләнә, Сталиндан ун ике рәхмәт хаты ала.

1945 йылда, ҡартатайым тыуған Башҡортостанына иҫән-һау әйләнеп ҡайта һәм Үрге Мотал ауылында уҡытыусы эшен дауам итә. Ошо яратҡан һөнәренә ул хаҡлы ялға сыҡҡансы тоғро ҡала. Таймаҫ ауылы ҡыҙы, уҡытыусы Муллағәлиева Сәғиҙә менән тормош ҡора һәм алты ҡыҙ үҫтереп, уларҙы аяҡҡа баҫтыралар. Иң оло ҡыҙҙары – минең өләсәйем Зөһрә, уның ҡыҙы Зәлифә – минең әсәйем.

Ҡартатайым менән ҡартәсәйем 64 йыл бергә татыу ғүмер итәләр, улар күптәргә өлгө. Мин һуғыш һәм хеҙмәт ветераны ҡартатайым менән бик ғорурланам. Ҡурҡыныс һуғыш кырҙарын үткән ҡартатайымдың күңеле ҡатмаған, ул бөгөн дә бик кешелекле, алсаҡ, киң күңелле, изге кеше. Яҡты, тыныс, матур тормош өсөн, уға рәхмәтлемен, сөнки Бөйөк Еңеүгә уның өлөшө ингән. Ҡартатайыма ныҡлы һаулыҡ, бәхетле ҡартлыҡ һәм оҙаҡ йылдар беҙҙе ҡыуандырып йәшәүен теләйем.

**Зәлиә СОЛТАНГӘРӘЕВА.**
**Күмертау ҡалаһының 6-сы мәктәбе.**

## ИҪКӘ АЛЫП ҺАМАН КӨТӘБЕҘ...

Ныҡлы баҫып тыуған еремдә,
Киң күкрәк менән тын алам.
Үҙ телемдә иркен һөйләшеп,
Тыныс таңдарыма ҡыуанам.

Тыныс таңдарҙы һуң кемдәр беҙгә
Бүләк иткән, ғүмерен аямай?
Тыныслыҡты бүләк иткәндәрҙе,
Беҙгә оноторға ярамай…

Зәңгәр күкте ҡаплап, ҡара болот
Килеп инде тыуған илемә.
Рәнйеш, ҡайғы, күҙ-йәш, юғалтыуҙар
Алып килде дошман еремә.

Илем халҡы яуға ынтылды,
Тыуған ерен, илен һаҡланы,
Һуңғы һулышында алға барҙы
Ут, һыу үтте – күптәр ҡайтманы.

Иҫән ҡайтҡандарҙы хөрмәт итеп,
Ал сәскәләр бүләк итәбеҙ.
Яуҙа ҡалғандарҙы онотмайбыҙ,
Иҫкә алып, һаман көтәбеҙ.

**Линария ҒӘЛИМОВА.**
**Дәүләкән районының**
**Бурангол ауылы.**



Нәсимә ЙОСОПОВА

# ҺАУМЫ, ЗӘҢГӘРКҮЛ!

**(Булыуы ихтимал хәл)**

– Өләсәй, унда йылан йәшәйме әллә? – тип һораны Гөлүсә, өйҙәре янында үк йәйелеп ятҡан һаҙлыҡҡа күрһәтеп.

Мәрхәбә әбей, ҡапылдан ғына ни тип әйтергә белмәй, аптырап торғас:

– Эй, Аллам, тамам бәлә булды инде ул нәмә. Күпме ерҙе тартып алды беҙҙән, ҡомһоҙ! – тип һаҙлыҡҡа ҡарап бармаҡ янаны. – Әйҙәле, өйгә инәйек, мин һиңә Зәңгәркүл хаҡында һөйләрмен.

– Элегерәк беҙҙең өй эргәһендә булған күл тураһындамы?

– Эйе. Күптән телемдәге төйөн сиселгәнде көтә инем. Бөгөн телем үҙе: “Онотоп ҡуймаҫ элек һөйләйек инде,” – тип күңелемә тынғылыҡ бирмәй.

– Шулай булғас, тиҙерәк һөйлә, өләсәй. Минең ҡолаҡтарым да ҡыҙыҡлы хикәйәт тыңларға әҙер, – тип, ҡыҙ әбейенә ҡараны.

– Рәхәт йәшәгән саҡтарҙы иҫкә алыуы ла күңелле шул, – тип һүҙ башланы өләсәһе. – Һине ҡулыбыҙға алып һөйөргә лә өлгөрмәнек, шатлыҡ-ҡыуаныстар бергә йөрөй тигәндәй, Ер-әсә ҡуйынынан да сылтырап шишмә атылып сыҡты. Көн тимәй, төн тимәй, туҡталмайса аға торғас, зәңгәр күҙле, түңәрәк йөҙлө, мул һыулы күлгә әйләнде.

– Ә мин, ҡара ҡашлы, һоро күҙле, атлап түгел, осоп йөрөүсе еңел һөйәкле ҡыҙға әйләндемме?

– Эйе, бәләкәсем минең.

– Йондоҙҙай емелдәп, тулған айҙай балҡып ятҡан күлебеҙҙе уратып төҙ ҡамыштар, көмөш талдар, муйыл, балан ағастары үҫте. Йомшаҡ һыуында алтын балыҡтар һикерешеп уйнаны. Яҙҙарын ҡыр өйрәктәре, аҡҡоштар ҡайтып, оя ҡороп, бала сығарҙы. Ошондай хозурлыҡҡа, ошондай гүзәлеккә иркәләнеп йәшәгәндә, ауылыбыҙға көтөлмәгән бәлә килде... Ҡапылдан ғына күлебеҙҙең һыуы күҙгә күренеп кәмей, тирә-яғындағы ҡамыштары ҡорой башланы. Эргәһендә ял итеүселәр, балыҡ ҡармаҡлаусылар: “Күл һыуы болғансыҡ, балыҡтар ҙа үрсемәй,” – тип, башҡа йылға, күл буйҙарына күсте.

Күңеле гел изгелектә булған күл был хәсрәткә түҙмәне, бер иртәлә былай тине: “Дуҫтарым, быға тиклем һеҙҙе мул һыуым менән туйындырып, күңелдәрегеҙҙе гүзәллегем менән һөйөндөрөп йәшәнем. Бәлки, тағы шулай оҙаҡ йылдар изгелегемде күрер инегеҙ. Тик мин инде сирле, һыуыма ташланған сүптәр һулышымды быуа, күҙҙәрем күрмәҫ булды. Таянысым булған Мәңгелек күлдәр илендә, бәлки, терелермен, тигән өмөттә юлға сығам. Хәйерле юл теләгеҙ”.

Сабырҙарҙан сабыр Ер-әсәбеҙ һыҙланып тын алыуға, күл юҡҡа сығып, урынында асыҡ яралай тәрән соҡор ғына ҡалды. Ана шулай, балам, үҙебеҙҙең битарафлығыбыҙ, һаҡһыҙлығыбыҙ арҡаһында ғүмерлеккә бирелгән аманатты – Ер-әсә бүләген юғалттыҡ. Ә иртәгеһенә үк, ҡояш ҡалҡыуға, ҡуш усҡа һыйырҙай кескенә йән эйәһе: “Ҡыйырһыта күрмәгеҙ, мин әле сабый ғына,” – тигәндәй, муйылдай ҡара күҙҙәрен ялтыратып, йыйылған һыуға һыйынып, күл урынындағы бушлыҡта ята ине...

– Ул йән эйәһе – Ҡара һаҙлыҡтыр инде?

– Эйе. Бигерәк әрһеҙ булды үҙе. Ай үҫәһен көн үҫеп, ҡолас етмәҫ буй еткерҙе. Тирә-яғына ултыртҡан күпме үҫентеләребеҙҙе һәләк итте, эсер һыуҙарыбыҙға моронон тыҡты...

Гөлүсә, һаҙлыҡтан килгән төрлө еҫтәргә түҙә алмайынса, быуылып йүткергән өләсәһен түшәгенә ятҡырҙы. Дарыуҙар, һыу эсергәс, күҙҙәрен йомоп тынып ҡалған әбейенә йәлләп ҡарап торғас, тәҙрә эргәһенә килде. Ҡасандыр шау сәскәлә ултырған, хәҙер тынсыу еҫтән шиңеп ҡороған яран гөллө көршәкте ситкәрәк күсереп, һалҡынса быялаға маңлайын терәне. Өләсәһе уға күптән йөрәк түрендә йөрөткән ниндәйҙер ғәжәп бер серен асып бөтөрмәгәндәй тойолдо. Ул уның һүҙҙәрен ҡабат иҫенә төшөрҙө: “Һин тыуған йылда, игеҙәк һыңарыңдай, ер ҡуйынынан да сылтырап саф шишмә сыҡты”. “Саф һыулы шишмә... Минең игеҙәгемдәй. Ул үҫкән, ҙурайған, матур күлгә әйләнгән. Ауылыбыҙҙың йәме, тәбиғәтебеҙҙең күрке булған. Ә мин? Мин дә үҫеп киләм... Ниндәй сер булыуы мөмкин? Күлгә әйләнмәм бит инде. Тимәк, миңә ярҙам итерҙәй кемдер бар?” – тигән һөйөнөслө уйҙан Гөлүсәнең ҡапыл күңеле күтәрелде. Үҙе лә һиҙмәҫтән, түрҙәге шкафҡа барып, аҡ яулыҡҡа уралған, кескенә китапты алып, әбейенә һуҙҙы.

– Өләсәй, уҡы әле, киләсәкте әйтеп биреүсенең китабында нимәләр яҙылған икән? Ҡара һаҙлыҡты еңеүсе батыр тураһында ла һүҙ барҙыр, моғайын.

Мәрхәбә әбей, күҙлеген кейеп, китаптан үҙенә кәрәкле битте тапҡас, өйҙә бер кем булмаһа ла, ярым бышылдап, эске бер серле тауыш менән уҡый башланы: “Фәләнсә йылда тәбиғәткә ҡарата һаҡһыҙ мөғәмәләнән шишмә-күлдәр-

ҙең һыуы кире ергә китә. Көтөлмәгән һаҙлыҡ килгәс, йәм китә, төрлө сир, бәлә-ҡазалар күпләп килә. Фәләнсә йылда шишмәләрҙе үткер, сая ҡыҙ ҡотҡара". Мәрхәбә әбей, күҙлеген һалып, уҡығандарым аңлашылдымы, тигән ҡиәфәттә ейәнсәренә ҡараны. Гөлүсә уның китапты ябырға йыйынғанын күреп:

– Нишләп артабан уҡымайһың, өләсәй? Тағы нимәләр яҙылған, уҡы инде, – тип үтенде. – Әгәр китапта яҙылғандар дөрөҫ булһа, шишмә-күлдәрҙе ул ҡыҙ быйыл ҡотҡарасаҡ бит. Исеме кем икән? Ә Ҡара һаҙлыҡ ҡайҙа була?

Әбейе:

– Эй, һорауҙарың күп тә инде, балам. Мин ҡайҙан ғына белеп бөтөрәйем, – тип ҡыҙҙы еңелсә шелтәләп, тағы китапҡа күҙ һалды. – Игеҙәк, игеҙәге... – тигәс, ейәнсәренә ишетергә ярамаған һүҙҙәрҙе уҡый башлағанын һиҙеп, уҡыуынан туҡталды.

Төштән һуң Гөлүсә өйҙәре артындағы туғайлыҡҡа төштө. Ниәте сәйгә еләк, бөрлөгән ҡараштырып ҡайтыу булһа ла, иҫендә китаптағы һүҙҙәр ине. Бер кемдең дә көсө етмәҫтәй Ҡара һаҙлыҡты еңеүсе ҡыҙҙың кем булыуы мөмкин? Ул, берсә башы күктәргә ашҡан Сейәле тауылай бейек, мөһабәт кәүҙәле, берсә, зифа ҡайындай нескә генә бер һылыу ҡыҙ булып күҙ алдына килә. Бәлки, ул батыр – егет кешелер?

Көндән-көн ҡомһоҙлана, ғәйрәтләнә барған, утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ Ҡара заттан нисек ҡотолорға? Нисек, ниндәй ысулдар менән еңергә? Нишләп ул үҙе шул китапҡа яҙылған сая ҡыҙ түгел? Һаҙлыҡты күреү менән ҡалтырап төштө. Ниңә шундай нескә күңелле ул? Туҡта!.. Китапта бит "игеҙәк", "игеҙәге" тип тә телгә алынған. Бәлки, ул ҡыҙ – мин үҙемдер?! Күңелендә уянған ышаныстан Гөлүсә дәртләнеп китте. Үҙен ҡыйыу, батыр итеп тойғоһо килеүҙән йөрәгендә дәрт, тәнендә көс уянды. Шундай төрлө икеләнеүҙәр ағымында Түңәрәк урманға яҡынлашты. Дым етмәүҙән күп ағастар ҡороп, һирәгәйһә лә, урман йәшәй ине әле. "Иҫән булһаҡ – бирешмәбеҙ!" – тип Гөлүсә әллә урманға, әллә үҙ-үҙенә өндәшеп, ҡайын төпһәһенә барып ултырҙы. Саф һауа ауыр уйҙарынан арындырып, йәненә тыныслыҡ бирҙе. Ул үҙе лә һиҙмәҫтән йоҡомһорап китте лә, урман аръяғында гөрһөлдәгән тауышҡа һиҫкәнеп, күҙҙәрен асты. Быныһы тағы ниндәй шом тигәндәй, шул яҡҡа ҡараны ла, ҡапыл башына килгән фекергә ҡыуанып, ҡулдарын сәпәкәйләне. Ел, ел! Ул ярҙам итәсәк!

Ел ағымында, диңгеҙҙәге ҙур-ҙур карапта-рҙай, күк йөҙө буйлап талғын ғына йөҙөп килеүсе болоттар күренде. Улар, ғорур аҡҡоштарҙай теҙелешеп, Гөлүсә өҫтөнән үттеләр. Артараҡ ҡалғандары ашығып, бер-берейһенә ҡушылып бәрелгәндә күк күкрәгән тауыштар сыҡты, һыуҙары сайпылып ҡыҙҙың өҫтөнә тамсылар сәсрәне. Гөлүсәнең алһыуланған йөҙөнә дымлы һауа бәрелеп, ҡалын сәс толомдары тирбәлеп ҡуйҙы. Ул, сабыр ғына, ауыр болоттарҙы барлап килеүсе елде көтөп алды ла:

– Ел, ел, туҡтап үтенесемә ҡолаҡ һалсы, – тип өндәште.

Ел, уның һүҙҙәрен ишетеп, ашығып барған еренән кинәт кенә туҡталды. Ҡалын ҡаштарын йыйырып, асыуланып:

– Нишләп мине барыр юлымдан туҡтатаһың? – тип һораны. – Күрмәйһеңме ни, мөһим эш менән китеп барам, Көньяҡ Уралда ямғыр юҡ икән. Йәше-ҡарты һыу буйына ямғыр теләргә төшкән. Ярар, үпкәләмәйем, дуҫтар ауыр саҡта һынала тигәндәй, мин дә ярҙамға ашығам.

– Тәүҙә танышайыҡ. Мин – Гөлүсә.

– Мин – Етеҙ ел, – тип ел уның устарын ҙур ҡулдарына алды:

– Йә, хәҙер әйт, ниндәй уйҙар борсой кескәй йөрәгеңде?

Зиһенле ҡыҙ йомошон йомошларҙан алда елдең күңелен күтәрерҙәй һүҙҙәр әйтте:

– Етеҙ елкәй, һин беҙҙең ауылға ла яуымтөшөмдө ваҡытында алып килеп еткерәһең. Тәҙрә шаҡып хәлдәребеҙҙе беләһең. Рәхмәт беҙҙе хәстәрләүеңә.

Маҡтау һүҙҙәренән күңеле күтәрелгән ел, ғәйрәтләнеп, хатта һыҙғырып ҡуйҙы.

– Йә, әйт үтенесеңде, тотҡарлама, юл кешеһенең юлда булыуы яҡшы.

Гөлүсә ауылдары уртаһындағы, үҙ тамағын ғына ҡайғыртыусы Ҡара затҡа табан эйәге менән ымланы:

– Күрәһеңме?

– "Мәңгелек һаҙлыҡтар" иленән килгән Ҡара һаҙлыҡтымы?

– Эйе. Әрһеҙ талпандай килеп йәбеште лә, хәҙер бер нисек тә ҡыуып ебәреп булмай.

– Орсоҡтай бөтөрөлөп, өйөрмәләй өйөрөлөп, ерҙән һурып алайыммы?

– Юҡ, юҡ! – Гөлүсә һаҙлыҡлы күкте күҙ алдына килтереп, ҡурҡып ҡулдарын һелкте. – Берүк тейә күрмә!

– Әйт һуң, нимә эшләтәбеҙ?

Гөлүсә, үҙ ҡылығынан үҙе оялып, һорау бирҙе:

– Талпандан нисек ҡотолалар, беләһеңме? Өҫтөнә шыйыҡса тамыҙалар.

– Эһ-һем... Һаҙлыҡ ҡар-ямғырҙан ҡурҡмай.

– Аҙҙан ҡурҡмай, күптән ҡурҡыр, – ҡыҙ күңелендәге уйҙарын елгә әйтте.

Уның һүҙҙәре юлында күп мажаралар күргән елде уйға һалды. “Ризалашһам, Тәбиғәт-әсәгә зыян килмәҫме?” – тип уйланы. Ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарыу булһа? Шулай ҙа ул эшләнәһе эштәрен күҙаллағас, тәүәкәлләне:

– Ер-әсәгә мөрәжәғәт ит, ул да ярҙам итһә, мин ҡушҡаныңды үтәрмен.

Ел тиҙ генә хушлашып, һыу тейәлгән ҡурғаштай ауыр болоттарҙы Урал яғына ҡыуҙы. Гөлүсә таң атыуын түҙемһеҙләнеп көттө. Әленән-әле күк йөҙөнә күҙ һалып, таң йондоҙон эҙләне. Тәҙрәнән таң хәбәрсеһе балҡып күренеү менән тиҙ генә һикереп тороп, урынын йыйыштырғас, ишек алдына сыҡты. Иртә торһаң – юл уңа, тиҙәр. “Хоҙайым, минең юлымды ла уңышлы ит,” – тип теләй-теләй, ысыҡлы үләндәрҙе ярып, осрашыуға ашыҡты. Етеҙ ел ҡайһы болонда Ер-әсә менән асыҡтан-асыҡ һөйләшеп булғанлығын әйткәйне. Шуға күрә, оҙон юлды ҡыҫҡартып, үҙе генә белгән һуҡмаҡтар аша тура юлдан китте. Аҡһыл томан-сымылдыҡ эсендә уянып-уянмаҫ ятҡан аҡлан уртаһына еткәс, яңғырауыҡлы, моңло тауыш менән:

– Хәйерле иртә, әй, Тәбиғәт! – тип ҡысҡырып сәләм бирҙе.

– Барыбыҙға ла хәйерле иртә! – тигән, бик зирәктәр генә ишетә алған, танһыҡ ауаз яңғыраны.

Гөлүсә ваҡытты һуҙырға ярамағанлығын иҫләп, ниәттәрен әйтеп ҡалырға ашыҡһа ла, Бөйөк Тәбиғәтте һәр ваҡыт үҙе менән булған иң яҡшы кешеһе – өләсәһе ҡиәфәтендә күҙ алдына килтереп, тәүҙә кисереү һорап баш эйҙе:

– Ер-әсәм, беҙҙең белеп һәм белмәйенсә ҡылған барлыҡ хаталарыбыҙҙы ла ғәфү ит! Башҡаса йылға-күлдәребеҙгә сүп-сар ташламабыҙ, һулар һауабыҙҙы таҙалап тороусы үҫемлектәрҙе тәрбиәләрбеҙ, йән эйәләрен ҡыйырһытмабыҙ.

Ҡыҙҙың әйткәндәрен күңеленә яҡын алған Ер:

– Балам, мин һеҙҙең белеп һәм белмәйенсә ҡылған барлыҡ хаталарығыҙҙы ла кисерәм, һеҙгә рәнйемәйем. Ә хәҙер башыңды күтәр, күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшәйек, – тине.

– Ер-әсәм, ауылдашыбыҙға әйләнгән Ҡара һаҙлыҡтан ҡотолоу өсөн беҙгә һинең ярҙамың кәрәк.

Ер үҙе лә һиҙмәҫтән уфтанып ҡуйҙы:

– Һаҙлыҡ ул – һаҙлыҡ ҡына түгел, ул минең күкрәгемдәге яман шеш. Үҫә, ҙурая барған һайын хәлемде ала, һулышымды быуа.Тик ауыр сиргә дауа юҡ...

Уның һыҙланғанын белдереп, яҡындағы урман шауланы, туҙан туҙҙырып елдәр йүгерешеп уҙҙы. Бер миҙгелгә күк йөҙөн ҡараңғылыҡ сорнап алды.

– Дауаһы бар, Ер-әсәм. Етеҙ ел тиҙҙән Ҡара һаҙлыҡтың юлдарын быуыр. “Мәңгелек һаҙлыҡтар” иленә ҡыуыр, – тип ел менән булған һөйләшеүҙәрен уға бәйән итте Гөлүсә.

Ҡыҙҙы иғтибар менән тыңлаған Ер-әсә:

– Мине лә хәстәрләп йөрөүегеҙгә рәхмәт, балам. Аяҡ-ҡулдарыңдан изгелек күр. Етеҙ елгә әйт: “Ер-әсәбеҙ – риза,” – тигән. Мин, ваҡыты еткәс, тауҙарҙы тетрәтмәҫкә, урмандарҙы шаулатмаҫка, йылға-күлдәрҙе сайпылдырмаҫка тырышып тын алырмын, – тип, сир-ғазаптан ҡотолоу сараһы барлығына ҡыуанып, Гөлүсәне оҙатып ҡалды.

Хаталарһыҙ йәшәргә ҡасан өйрәнербеҙ икән, тигән төрлө уйҙар эсендә янып атлаған ҡыҙ ҡаршыһына ниндәйҙер көйҙө һыҙғыра-һыҙғыра килеүсе Етеҙ елде күреп туҡталды.

– Йә, нисек, юлдарың уңдымы?

Ел, һыҙғырыуынан туҡтап, йыр һүҙҙәренә күсте:

– Бәрәкәткә туйынһын ер,
Ямғыр яу, яу, туҡтама!
Ямғырҙа үҫкән гөлдәрҙән
Ысыҡ түгел – бал тама.

Бына шулай, дуҫҡай, зарығышып ямғыр көткәндәр, тәүге тамсылар һибелеү менән, шулай таҡмаҡлай ҙа башланы.

– Һөйөнөсөңә ҡушылам, минең дә юлым уңды.

– Йөҙөңә ҡарап, улай тип әйтмәҫ инем.

– Ер-әсәнең һыҙланыу-әрнеүҙәре беҙҙең интегеүҙәрҙән күпкә көслөрәк икән. Тиҙерәк ярҙам итәйек!

– Көтөгөҙ! Һеҙҙеңсә әйткәндә, елдәй елеп килеп тә етермен.

Ҡыҙ ауылға ҡайтырға ашыҡты. Көрәк һабына таянып баҫып торған синыфташы Ғәлиҙе күреп, Гөлүсә Етеҙ ел, Ер-әсә менән ниҙәр һөйләшкәнен ҡыҫҡаса ғына итеп Ғәлигә аңлатты ла:

– Яҡтыла килеп өлгөрһә генә ярар ине, – тип өҫтәне.

– Ҡомдо ла болотҡа һалып алып киләме? Үәт, ҡыҙыҡ! – ғәжәпләнеүҙән Ғәлиҙең йәшкелт күҙҙәре түңәрәкләнде, аҡһыл йөҙөнә һибелгән һипкелдәре тағы ла асығыраҡ беленде.

– Әйҙә, ҡом йәйеләсәк урынды билдәләйек. Көньяҡтан булһа, нисегерәк булыр? – тип дуҫының ни әйтерен көттө Гөлүсә.

– Эйе, шул яҡтан булһын, яры ла һөҙәгерәк. Һалҡын елдәрҙән ышыҡланыр өсөн төньяғына ағастар ултыртырбыҙ.

– Беҙһеҙ генә ни эш бөтөрәһегеҙ? – тип шаулашып синыфташтары ла килеп етте.

– Эште башламанык әле, һеҙҙе көтәбеҙ, – тине Ғәли.

Гөлүсә күк йөҙө буйлап үҙҙәренә табан аллы-артлы йөҙөп килеүсе ике болотто күреп, шатланды:

– Күрегеҙсе, беҙгә табан йөк тейәлгән ак караптар килә!

– Ниндәй караптар булһын ти, болоттар бит, – тип көлөштө ҡыҙҙар.

– Ана, алдан йөҙөп килгәне – беҙҙең буласаҡ күл.

– Күҙеңә күренәме? – тип көлдө синыфтарындағы сибәр, һауалы ҡыҙ Рәйлә.

Болоттар ауылдарына яҡынлашҡас, Гөлүсә:

– Шауламағыҙ! Шым ғына торһағыҙ, хәҙер бер мөғжизә буласаҡ, – тине.

Ҙур көмөш болот, Ҡара һаҙлыҡ ҡаршыһына етеүгә, туҡталыш яһап, яйлап ҡына түбәнәйә башланы. Урамдағы бала-саға, был күренештән ҡурҡып, өйҙәренә табан йүгерҙе. Ҡалғандар, бер ни аңламайынса аптырашып, ергә яҡынайыусы болотҡа текәлде.

Тәбиғәттәге, ахыры нисек булыр тигән, шомло ла, өмөтлө лә тынлыкты Ер-әсәнең һулышы бүлде. Һәм күркәләй ҡабарған һаҙлыҡ ер эсенә инде. Үҙ эшенең оҫтаһы Етеҙ ел, шул мәлдән файҙаланып, ауыр болотто әле генә бушаған урынға ултыртҡас, икенсе болоттағы алтындай балҡыған, терегөмөштәй тере, диңгеҙ гәрәбәһендәй сихәтле ҡомдо көньяҡ ярға бушатты. Нисәмә йылдар буйы күңелдәрҙе тетрәндереп, ағыулы, зәһәр пары менән тәндәрҙе зәғифләндереп йәшәгән Ҡара һаҙлыҡ биләмәһендә Көмөш болот һыуҙары тулҡынланды. Ауыл да, ауыр йөктән ҡотолғандай, иңдәрен турайтып, йәшәреп, нурланып китте.

Ҡойма башына ҡунып был тамашаны күҙәткән һайыҫҡан һөйөнсөләп, йорттан йортҡа күскәнсе, һиҙгер әтәстәр бер остан икенсе осҡаса кикерикүкләп, сәләм ебәреп тә өлгөрҙө.

– Кәрәгем тейһә, тағы саҡыр, Гөлүсә. Тартынып торма, йәме? – тине үҙ эшенән ҡәнәғәт ҡалған етеҙел. Ул, күл тирәләй ҡулға-күл тотоношоп әйләнгән балалар менән хушлашҡас, үҙе генә белгән дәртле көйҙө көйләй-көйләй, "Мәңгелек елдәр" иленә ҡайтып китте.

Гөлүсә Ер-әсәгә лә рәхмәттәрен, маҡтауҙарын әйтте, яман сирҙән ҡотолоуы менән ҡотланы.

Шатлыҡтан күңеле тулышҡан Ер-әсәкәйҙең күҙҙәренән дә мөлдөрәп йәштәр сыкты. Сыкты ла, ике шишмә булып ағып китте. Тик ул шишмәләр, берҙәмлектә көс тигәндәй, яңғыҙҙары ғына аҡмайса, бергә ҡушылып, ауыл буйлап йөрттарҙан да фатиха ала-ала, оло диңгеҙгә табан юл алды.

Был күренеште таң ҡалып күҙәткән Гөлүсәгә Ер-әсәбеҙ:

– Балам, был шишмәләрҙең береһе "Ҡурайлы", икенсеһе "Муйыллы" булыр. Ике шишмә ҡушылған ерҙән "Көйөргәҙе" йылғаһы башланыр. Йылғала бер хикмәт булып, әҙәм балалары ғүмерҙәре буйы шул серҙе эҙләр, – тине.

"Муйыл араһынан аҡҡаны "Муйыллы" – тәүге килгән шишмәлер, моғайын. "Ҡурайлы" буйы шишмәһе – икенсе шишмәбеҙ булалыр," – тип юраны ҡыҙ. "Ә ни өсөн "Көйөргәҙе"? Ниндәй сере бар?" – тип һорамаҡсы ине, уның уйҙарын бүлеп, Ер-әсәнең ауазы яңғыраны:

– Еңеүселәргә бүләгем – ошо. Шифалы, мул һылулы йылға – юлдаш та, моңдаш та булыр!

"Амин, шулай булһын!" – тип теләй-теләй, Гөлүсә лә ҡулына көрәк алып, яр буйлап ҡом йәйгән синыфташтарына ярҙамлашты. Күмәкләгәс, эш ырамлы барҙы. Балалар иртәгәһе көнгә нисә төп ағас, ниндәй ҡыуаҡтар ултыртырға икәнен дә кәңәшләшкәс, эштән һуң аяҡ-ҡулдарын йыуып, һыу ҡойоноу костюмдары алып, күлдә ҡойонорға килергә тип килешеп, ашығып өйҙәренә таралдылар. Гөлүсә, Ҡара һаҙлыктан нисек ҡотолоуҙарын әбейенә һөйләп, уны ла һөйөндөрөргә, күл буйына саҡырырға тип китергә йыйынғанда:

– Гөлүсә, Гөлүсәү? Ишетәһеңме мине? – тип кемдеңдер үҙенә өндәшкәнен ишетте. – Гөлүсә, мин бит терелдем! Һин мине танымайһыңдыр ҙа әле, эйеме?

– Зәңгәркүл? Өләсәй һөйләгән күл – һинме ул? Һаумы!

– Һаумы, игеҙәгем! Етеҙ елдән хәбәр ишеткәс тә, Мәңгелек күлдәр иленән шифалы һыуҙар алып, кире ҡайтырға ашыҡтым. – Ул йөҙөндәге тулҡындарын шаҙраландырып йылмайҙы. – Рәхәтләнеп дауаланығыҙ, сирҙәрҙән арынығыҙ.

Ейәнсәренең шатлыҡлы ауазын ишеткән Мәрхәбә әбей, ҡаушауынан галоштарын да кейергә онотоп, ап-аҡ йөн ойоҡтарҙа ғына урамға сыҡты. Күлде үҙ урынында күргәс:

– Һаумы, Зәңгәркүл! Ҡайттыңмы? Рәхмәт яуғыры! – тип уға өндәште.

Һөйөнөслө тауышты ишеткән күршеләре лә күл буйына ашыҡты.

– Зәңгәркүл терелгән!

– Зәңгәркүл ҡайтҡан!

– Һаумы, Зәңгәркүл! – тигән ҡыуаныслы ауаздар, йәмләнеп, йәшәреп киткән ауылға, тағы ла оҙаҡ-оҙаҡ ваҡытҡа бәхет, сәғәҙәтлек инеүен аңлата ине.

# УРМАНДЫ ҺАҠЛАЙЫҠ!

**Башҡортостандың 40 процент майҙанын урмандар билəй. Быйылғы ҡоро йəй шарттарында урмандарҙы янғындан һаҡлау мəсьəлəһе үтə ҡырҡыу торҙо. Ҡоролоҡ менəн килгəн янғындар илебеҙ өсөн оло афəткə əйлəнде, тотош ауылдар янып юҡҡа сыҡты, кешелəр һəлəк булды. Башҡортостан урмандарында 540 янғын осрағы теркəлгəн. Уларҙың күпселеге ойошҡан рəүештə ваҡытында һүндерелеп торҙо.**



*Əбйəлилдə быйылғы урман янғыны*



*Əбйəлил урмансылығы бинаһы ла – башҡаларға өлгəһө*

Ə бит урмандарҙа сыҡҡан янғындарҙың үндан һигеҙе кеше ғəйебе менəн барлыҡҡа килə һəм таралып та китə. Күпселек янғындарҙы сығармау өсөн ябай хəүефһеҙлек ҡағиҙəлəре тураһында беҙ республикала алдынғыларҙан һаналған Əбйəлил урмансылығы лесничийы Ишморат Шамил улы Əминевтан һораштыҡ.

– Урмандарҙа янғындарҙың сығыуы, ысынлап та, күпселектə кешенең эшмəкəрлегенə бəйле. Ябай ғына ҡағиҙəлəрҙе үтəү генə лə уларҙы булдырмау өсөн кəртə була ала. Мəҫəлəн, ағас төбөндə үк, йəш ағаслыҡ араһында, таҙартылмаған урындарҙа усаҡ яғырға ярамай. Ҡоро үлəнгə ташлап киткəн һүндерелмəгəн шырпы, тəмəке төпсөгө лə янғын сығара ала. Кеше йөшəгəн ерҙəн сығарылған сүпсарҙы ла телəһə ҡайҙа яндырырға ярамай. Ерҙе ҡаулан үлəндəн таҙартыу маҡсатында уны яндырып ебəреү иртə яҙҙа үк янғындарға килтерə.

Шулай уҡ дөйөм халыҡ өсөн иғлан ителгəн ғəҙəттəн тыш хəлдəр ваҡытында урманға йөрөүҙəн тыйылыу яҡшы. Əгəр урманда усаҡ тоҡандырырға кəрəк булһа, уның урыны мотлаҡ əҙерлəнергə тейеш. Тупраҡтың өҫкө уңдырышлы ҡатламы ярты метр киңлектə ҡаҙыла. Кəрəге ҡалмаған усаҡты мотлаҡ һүндереп, кире күмеп китергə кəрəк.



*Аскарҙа быйыл урмансылар Еңеү паркын булдырҙы*



Хəҙер мəктəптəрҙə барлыҡ балаларға ла экологик тəрбиə бирелə. “Урман академияһы” экологик программаһына ярашлы, урмандарҙа үҙеңде нисек тоторға кəрəклеген һəр бала үҙлəштерергə тейеш, – тине ул беҙгə.

Урмандарҙы һаҡлайыҡ, сөнки ул – Ерҙең үпкəһе. Тəбиғəтте ҡоротоу кешелектең дə юҡҡа сығыуының сəбəпсеһе булыр. Халҡыбыҙ юҡҡа ғына һəр кем үҙ ғүмерендə бер генə булһа ла ағас ултыртырға тейеш тип əйтмəгəн.

**Т. АМАНОВ.**

**Күренекле дәүләт эшмәкәре һәм ғалим**
**Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың тыуыуына – 120 йыл**

# *Оло тормош юлының башы*

**Быйыл 10 декабрҙа башҡорт халҡының бөйөк улы, Башҡортостан дәүләтселегенә нигеҙ һалыусы, донъяға танылған ғалим Әхмәтзәки Әхмәтшаһ улы Вәлидиҙең тыуыуына 120 йыл тула. Ул халҡыбыҙ тарихында Салауат Юлаев кеүек тәрән эҙ ҡалдырған шәхестәрҙең береһе.**

Зәки Вәлиди 1890 йылдың 10 декабрендә Өфө губернаһының Стәрлетамаҡ өйәҙенә ҡараған (хәҙерге Ишембай районы) Көҙән исемле башҡорт ауылында донъяға килгән. Ул үҙенең тамырҙары тураһында былай тип яҙа: “Төп ырыуыбыҙ Суҡлыҡай, йәнә беҙгә яҡын Һәнәклекәй, Йөрәктаукай, Таулыҡай төркөмдәре менән бергә Ҡай йәки Ҡайлы ырыуының бер өлөшө булып тора”. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин яҙыуынса, “Ҡай” һүҙе ул Йылан исемле башҡорт ырыуының монголса атамаһы.



Зәки Вәлиди бала саҡтан зирәк булып үҫә. Тәүҙә атаһы Әхмәтшаһ мулла ҡулында белем ала. “Мин 6-7 йәштәремдә үк ғәрәп һәм фарсы телдәрен менән бергә урыҫ телен өйрәнә башланым. Өс телде был кәҙәр өйрәнә башлауым тормошомда миңә күп ваҡытты һаҡлап ҡалырға мөмкинлек бирҙе”, – тип яҙа ул үҙенең хәтирәләрендә. 12 йәшенән Үтәк ауылында (хәҙерге Ғафури районы) әсәһенең бер туған ағаһы, Хәбибназар мулла мәҙрәсәһендә белемен камиллаштыра.

“Ғаиләбеҙ менән дуҫлыҡ мөнәсәбәтендә булған кешеләрҙең күбеһе Башҡорт ғәскәрендә ата-бабаларыбыҙ менән бергә хеҙмәт иткән кешеләр ине. Уларҙың иң яҡындары ауылыбыҙҙан алты саҡырым алыҫлыҡтағы Маҡар ауылынан Ҡармыш уландары, Алағуян ауылынан Ҡасҡар улдары булды”, – тип яҙа Вәлиди. Маҡарҙан Зәки Вәлидиҙең балалыҡ дуҫы Әмир Ҡарамышев, артабан милли-азатлыҡ хәрәкәтендә яҡын арҡаҙаштарының береһе, ҡаһарман сардар була. Ғәни һәм Мөхтәр Ҡарамышевтар ҙа 1918-1919 йылдарҙа Башҡорт армияһында сардарҙар булып хеҙмәт итә.

1908 йылда Үтәк мәҙрәсәһен тамамлағандан һуң, Зәки уҡыуын артабан дауам итеү теләге менән яна. Әммә атаһы уны өйләндереп ауылда ҡалдырырға иҫәп тота. Уҡыу теләге көслө булған 18 йәшлек егет атаһының ҡунаҡҡа киткән мәленән файҙаланып, Ырымбур сығып китә. Артабан Әстерхан ҡалаһына юллана, һуңынан Ҡаҙанға барып “Ҡасимиә” мәҙрәсәһенә уҡырға инә. Атаһы һәм олатаһы ҡулында төплө белем алған Зәки Вәлиди 1909 йылдан үҙе “Ҡасимиә” мәҙрәсәһе шәкерттәренә төрки тарихы һәм ғәрәп әҙәбиәте буйынса һабаҡ бирә башлай. Киләһе йылында инде Ҡаҙан университетында тарих һәм тел буйынса лекцияларға ла йөрөй. Мәҙрәсәлә уҡыу йылдарында Вәлиди башы менән ғилем донъяһына сума.

1912 йылда 22 йәшлек ғалим “Төрк үә татар тарихы” тигән тәүге хеҙмәтен баҫтырып сығарып шәркиәт ғалимдары араһында ҙур абруй ҡаҙана. Уның хеҙмәте ғилми даирәлә ҙур баһалана. Уны ғилми эшкә йәлеп итә башлайҙар. 1913-1914 йылдарҙа Вәлиди Төркостанда фәнни экспедицияларҙа ҡатнаша. 1915 йылда Өфөгә ҡайтып “Ғосмания” мәҙрәсәһендә уҡыта. Һәләтле егетте 1916 йылда Рәсәйҙең баш ҡалаһы Петроградҡа (Санкт-Петербургҡа) Өфө губернаһынан вәкил сифатында Рәсәй Дәүләт думаһының Мосолман фракцияһына эшкә ебәрәләр. Ошонан алып Зәки Вәлидиҙең тормошонда яңы дәүер – сәйәси эшмәкәрлек осоро башлана.

**Азат ЯРМУЛЛИН,**
**“Башҡорт энциклопедияһы” ғилми нәшриәтенең тарих бүлеге мөдире.**

**ҺҮРӘТТӘ: Зәки Вәлидиҙең атаһы Әхмәтшаһ, әсәһе Өммөлхаят һәм ҡустыһы Ғәбдрәүеф. 1924 йыл.**

# НИМӘ УЛ ИМАН?

**Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!**

**Иғтибар итһәгеҙ, һуңғы мәлдәрҙә көндәлек тормошта йыш ҡына иман һүҙенә тап булабыҙ. Иман тәғлиматтәре, “Иман” тапшырыуы һәм башҡалар. Һанай китһәң, бихисап улар. Был ябай ғына һүҙ асылда ниндәй мәғәнәне үҙ эсенә йәшергән икән? Беҙ уны дөрөҫ аңлайбыҙмы? Ошо хаҡта булыр артабанғы һүҙебеҙ.**



Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт, ғәләйһис-сәләм: “Иман – етмештән артыҡ тармаҡтан тора”, – тигән. Ошо хәҙис аша ғына ла “иман” һүҙен бары тик бер генә мәғәнәлә аңлап булмауы асыҡ ярылып ята.

Күптәребеҙ иманды шул уҡ Ислам, йәки дин тип аңлай торғандарҙыр. Уның синонимы тип һанаусылар ҙа юҡ түгелдер. Әлбиттә, улар хаҡлы. Ләкин был бары тик етмеш тармаҡтың береһе генә икәнен онотorға ярамай. Бында шул уҡ тәрбиә, әҙәп, әхлаҡ, ниәт, ихласлыҡ, изгелек, тоғролоҡ һ.б. сифаттар инә. Йәғни, ябайыраҡ әйткәндә, иман һүҙе аҫтына кешелек сифаттары йәшеренгән килеп сыға.

Иман асылы кешене камиллаштырыуҙан, аҡылын үҫтереүҙән, әхлаҡлығын ҡеүәтләндереүҙән ғибәрәт. Мөхәммәт, ғәләйһис-сәләм, шулай тигән: “Холҡо яҡшы булған мосолман – иман яғынан иң камил мосолман”.

Әхлаҡ юғарылығына тыумыштан да, уҡыу-өйрәнеүҙән дә, ғаилә тәрбиәһе аша ла өлгәшелә. Әҙәплелек күпселектә шуларҙың һәммәһенән дә килә.

Кейеп йөрөгән кейем туҙып юҡҡа сыҡҡан кеүек, имандың да туҙып юҡҡа сығыуы мөмкин. Шуға ла уны яңыртып ҡына торорға өйрәтә дин.

– Иманығыҙҙы яңыртып ҡына тороғоҙ! – тигән бәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм. Уны: “Лә иләһә илләл-лаһ” һүҙҙәрен йышыраҡ ҡабатлап ҡына яңыртып булыр,” – тигән ул. – Был һүҙҙәр – зекерҙең иң яҡшыһы. Шул һүҙҙәрҙән башҡа иман да дөрөҫ түгел, мосолман да мосолман була алмай.

Иман тураһында бәйғәмбәребеҙ үҙе замандаштарына ошолай аңлатма бирә:

– Яҡшы эштәрең шатландырып, насар эштәрең көйөндөрөп торорлоҡ булһа, һин – иманлы кеше, – тигән бәйғәмбәр, ғәләйһис-сәләм. – Әгәр ҙә бәндә Раббыһы – Аллаһ, дине – Ислам, Мөхәммәттең Аллаһ илсеһе булыуы менән ҡәнәғәтлек табып йәшәһә, ул кеше имандың да тәмен татып йәшәгән кеше була.

Иман – үҙ ара игелекле мөнәсәбәт, Аллаһ ризалығы өсөн тип бер-береңә ярҙам итеү, Аллаһ ризалығы өсөн тип бер-береңде һөйөү, хөрмәтләй белеү. Күрә алмаһаң да – Аллаһ ризалығы өсөн тип күрә алмау.Был иһә иманлы кешеләрҙең үҙ – ара аралашыуын аңлатыр.

Тимәк, кешеләр араһындағы яҡшы мөнәсәбәттәр – имандың да иң яҡшыһы һанала.

## ТЕЛДӘН ТӨШМӘҪ ДОҒАЛАР

**Күптәр йоҡлар алдынан йоҡлай алмай аҙаплана торғандыр. Ҡасандыр ишеткән, йә уҡыған ҡурҡыныс күренештәр, хәл-ваҡиғалар күҙ алдынан йүгереп үтә. Шул саҡта юрған аҫтына боҫоп, дер-дер ҡалтырап ятыуға ҡарағанда ошо доғаларҙы уҡыһағыҙ, әүен баҙарына киткәнегеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалырһығыҙ.**

### ЙОҠЛАРҒА ЯТЫРҘАН АЛДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!

Аллаһуммә, бисмикә әмүтү үә әхйә!

***МӘҒӘНӘҺЕ:***

Әй, Аллаһ! Һинең исемең менән үлермен, һинең исемең менән йәшәйем!

### ЙОҠОНАН УЯНҒАНДА УҠЫЛА ТОРҒАН ДОҒА

Бисмилләһир-рахмәнир-рахим!

Әлхәмду-лил-ләһил-ләҙи әхйәнә бәғдә мә әмәтәнә үә иләйһин-нүшүр.

***МӘҒӘНӘҺЕ:***

Үлгәндән һуң йәнә йән биргән, терелтеп үҙенә саҡырып аласаҡ Аллаһҡа маҡтау-ололауҙар булһын!

Доғаны белмәгән кешегә: “Һаулыҡ-сәләмәтлек менән тағы ла бер көндө башлап ебәрергә мөмкинлек биргән Аллаһҡа маҡтау-ололауҙар булһын. Тыуып торған көнөбеҙ хәйер менән килһен!” – тип тә доға ҡылырға мөмкин.

**Әлфиә АХМАЛЕТДИНОВА әҙерләне.**

«Хоҙай үҙе ҡыҙығыр...» Ш. Бабич

# ҺАҠМАР ЙЫЛҒАҺЫ

*Һаҡмар һыуы аға ҡибла табан*
*Урал тауы буйлап көн битләп...*
**(Башҡорт халыҡ йыры “Ғилмияза”)**





Һаҡмар ошонан башлана

Башҡорттоң йырҙарында данланған, риүәйәттәрендә телгә алынған Һаҡмар йылғаһы Уралтау һыртының көнсығыш битләүенән, Әбйәлил районында башланып, Баймаҡ, Йылайыр, Хәйбулла райондары, Ырымбур өлкәһе аша 760 саҡырым үтеп, Ырымбур ҡалаһы янында Яйыҡ йылғаһына ҡоя. Көньяҡ Уралдың матур биҙәге булып, тау-урмандар араһынан аҡҡан Һаҡмарҙың урта ағымы бик күп туристарҙы йәлеп итә. Яҙғы ташҡындарҙа һыу кимәлен көйләү өсөн Баймаҡ районының Әбделкәрим ауылы янында оҙонлоғо 13 саҡырым, тәрәнлеге 17 метрға еткән һыуһаҡлағыс төҙөлгән.

2004 йылдың йәйендә журналистар “Таҙа Һаҡмар өсөн” акцияһы үткәреп, йылғаның башынан аҙағына тиклем үтте. Әбйәлил районы башҡорттары ҡоролтайы Һаҡмар йылғаһы башын матурлап, урынды билдәләгән таш һәм йылға башы күрһәткесен ҡуйҙы.



Һаҡмар башын билдәләгән мәрмәр таш



# БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫНЫҢ ДӘҮЛӘТ СУВЕРЕНИТЕТЫ ТУРАҺЫНДА ДЕКЛАРАЦИЯ ҠАБУЛ ИТЕЛЕҮЕНӘ – 20 ЙЫЛ










## Chery M11

Ҡытайҙа етештерелгән әйберҙәрҙең сифатһыҙ тигән яманаты булһа ла, уларҙың төп өҫтөнлөгө арзанлыҡ булып ҡала. Ә был машинаны эшләгәндә ҡытайҙарға итальяндар, инглиздәр, англичандар ярҙам итешкән. Һөҙөмтәлә дүрт ил “ҡаҙаныштарынан” торған бер техник өлгө барлыҡҡа килгән. Тышҡы ҡиәфәте менән ул үҙ класындағы башҡа моделдәрҙән күпкә яҡшыраҡ күренә, ә бына эске йыһазландырыуында “ҡытайлыҡ” өҫтөнлөк итә. Шулай ҙа ул һатып алыусыға өс төрлө комплектта тәҡдим ителә ала.

117 ат көслө бензин двигателе йөҙ саҡырымға 14,8 секундта еткерә, йөҙ саҡырымға 7,1 литр бензин “ашай”.

Белгестәр фекеренсә, “Чери”ҙы ҡытай технологияларының Европа кимәленә ынтылыу тырышлығын ныҡлы “өслө”гә баһаларға мөмкин.

# «Аманат» коллекцияһы



## ВПК-3927 “Волк”

Ике һәм өс күсәрле төрҙә сығарылған “Бүре” бронеавтомобиле йәйәүле ғәскәрҙе тиҙ генә кәрәк ергә алып барыу өсөн тәғәйенләнгән. Башҡа машиналарҙан айырмалы рәүештә, “Бүре” модуль схемаһы буйынса ҡорола, йәғни, ялан шарттарында ла өҫтөн алыштырып, уны йөк машинаһы итергә лә, миномет йә ракета платформаһына ла әйләндерергә мөмкин.

Броняһы аҫтан 6 килограмм тротил шартлауына сыҙай, өҫкө ҡалҡаны яҡындан атылған броня пуляһын да үткәрмәй.

300 ат көслө двигателе 18 кешене сәғәтенә 120 саҡырым тиҙлек менән 1000 саҡырымға алып бара ала. Әлеге ваҡытта былдай машинаның ил хужалығында файҙаланыр өсөн броняһыҙ варианттары ла әҙерләнә.







**Кәтибә КИНЙӘБУЛАТОВА**



**15 сентябрҙә 90 йәшен билдәләгән күренекле шағирә Кәтибә Кәрим ҡыҙы Кинйәбулатова 1920 йылда Силәбе өлкәһе Арғаяш районының Мәүлит ауылында донъяға килә. Балалар өсөн күп әҫәрҙәр ижад итә. 1968-75 йылдарҙа яңы ойоштороләан "Башҡортостан ҡыҙы" журналының тәүге баш мөхәррире булып эшләй.**

## Әйләнһәмсе һайрар ҡошҡа мин

Тыуған илем тим дә
 һүҙ башлайым,
Тыуған илем –
 Башҡортостаным.
Уны ҙурлап тик бер һүҙ
 әйткәндә,
Әйләнһәмсе һайрар
 ҡошҡа мин.

Өйрәнһәмсе һандуғастың
 телен,
Моңон ота алһамсы йырыма.
Яҙһылыуҡай аҡ сәскәһен тотоп,
Ҡаршы сығыр ине юлыма.

Эйе, эйе, мин һандуғас булһам,
Йоҡо белмәҫ ине матурҙар,
Терелерҙәр ине,
Тыуған ил тип,
Башын һалған бөтә батырҙар.

Телгә килер ине Салауат та,
Шартлап ҡуйыр ине ҡамсыһы,
Юҡ, яу сабып түгел,
Былай ғына
Сәсрәтергә Иҙел тамсыһын.

Тыуған илем тим дә
 һүҙ башлайым,
Тыуған илем –
 Башҡортостаным.
Уны ҙурлап тик бер һүҙ
 әйткәндә,
Әйләнһәмсе һайрар
 ҡошҡа мин.

Сәсрәтергә көмөш ынйыларҙы,
Ҡыуанһын тип илдә балалар,
Йылтыр тамсыларҙа гөл ярала.
Гөлдәр үҫһә,
Уңала бит ауыр яралар.

Мин һандуғас булһам,
 көнө-төнө
Алһыҙ-ялһыҙ йырлар инем мин.
Яугирҙәргә үлмәҫ ғүмер биргән
Әсәйҙәргә наҙлар инем мин.

## Яҡты көн

Эй шатлыҡлы бөгөн иртәләр,
Ҡояш нурын һибә көлтәләп.
Һаумы, ҡояш!
Һаумы, яҡты көн!
Гөл-сәскәләр, наҙлы иркәләр!
Һаумы, ҡырҙар, болон,
 урмандар.
Таҡыя баш ҡырлы ҡурайҙар,
Хеҙмәткә дан йырлап туймаған
Аҫыл ҡанат һабан турғайҙар!
Һаумы, ҡая!
Күлдәр, ҡамыштар!
Саңҡ-саңҡ иткән
 таныш тауыштар.
Шыбыр-шыбыр
 тыныс тулҡынған –
Ебәк сәсле бойҙай, арыштар.
Һаумы, ҡояш!
Ерем, төйәгем!
Һеҙ тип ярһый минең йөрәгем.
Һеҙ тип, һеҙ тип
 ҡәләм тирбәтһәм,
Тик йондоҙҙар килә тирәһем.
Һаумы, ауылым!
Һаумы, яҡташтар!
Шоңҡарҙарға төйәк Арғужам!
Сәләм биреп һеҙгә бер баҡһам,
Бөтөп китә төҫлө бар нужам...
Ниндәй хозур тиһең йәшәүе,
Күлдәр беҙҙә сихри бер донъя:
Ялт-йолт килә
 алтын-көмөштәр,
Йөҙөп йөрөй күлдә мең һырға.
Был илаһи көмөш бишектә.
Саңҡылдаша аҡсарлаҡтары.
Һаумы, ҡояш!
Һаумы, яҡты көн!
Йәнгә яҡын тыуған яҡтарым!

## Тыуған телем

Атай, тигәндә лә һин кәрәк.
Әсәй, тигәндә лә һин кәрәк.
Тыуған ерем, айым, ҡояшым
Тип әйтһәм дә,
 телем, һин кәрәк.

Халҡым өсөн ирек даулаған,
Тыуған илем ҙурлап данлаған,
Салауаттай мәңге тере һин, –
Башҡортомдоң үлмәҫ теле һин.

Әсәй, тигәндә лә һин кәрәк,
Атай, тигәндә лә һин кәрәк.
Мәңге йырланасаҡ йырым һин,
Күңелемдең һүнмәҫ нуры һин.
Моңло, йырлы
 тыуған телем һин.

## Ҡара тупраҡ

Устарыма алдым ҡара тупраҡ,
Нимә икән был тип, юрама,
Ҡәҙимгесә, ҡара тупраҡ ҡына,
Тик мөғжизә унда ярала.

Ҡыҙыл гөлдәр үҫә
 шул тупраҡта,
Уға күпме һөйөү, тантана.
Йәшәү йәме, иле, көнө өсөн
Игенсенән күпме тир тама.

Устарымда бына ҡара тупраҡ,
Бөйөк уның һәр бер бөртөгө.
Өндәре бар,
 телдәре бар төҫлө,
Минең өсөн гүйә ул тере.

Ир яҙмышы, Ил яҙмышы бында,
Ҡайнар мөхәббәт тә, һағыш та,
Устарымда ҡара тупраҡ ята,
Икмәк тәме, бойҙай, арыш та.

Әсәйемдең,
 атайымдың ҡайнар
Һулыштарын ошо ер алған.
Ғәжәпме ни, изге тупрағымдан
Күңелемә һүнмәҫ йыр алһам!..




# ҠЕМ ҠҮБЕРӘК БЕЛӘ?

**Спортсылар һымаҡ уҡ, шәп малай бул!**

“Хөрмәтле редакция” – тип яҙа беҙгә Тәтешле районының Аҡсәйет ауылынан һигеҙенсе синыф уҡыусыһы Рөстәм Маликов. – Минең хобби – футбол һәм интернет. Дуҫтарым һәм мин һеҙҙең журналығыҙҙа Рәсәй һәм донъя футболы йондоҙҙарын күрергә теләр инек. Бәлки, футбол белгестәре конкурсы ойоштороп ебәрерһегеҙ?”

Уҡыусыларҙың теләге – редакция өсөн эшмәкәрлек йүнәлеше. Рөстәмдең кәңәшен иҫәпкә алып, беҙ “Шәп малай” конкурсы эсендә футбол ғына түгел, ә тотош спорт йондоҙҙарын таныу буйынса бәйге иғлан итергә булдыҡ. Ысынлап та, спорт төрҙәре бик күп, уларҙың һәр береһенең фанаттары бар. Малайҙарҙың ҡыҙыҡһыныуҙары шулай уҡ төрлө булыуын иҫәпкә алып, “Шәп малай” битендә төрлө темаларға башваткыстар ҙа сығарасаҡбыҙ.

Һеҙҙең бурыс – журналды алғас та, шәхестәрҙе танып, унда төшөрөлгән кешеләрҙең кемлеген һәм һүрәттәрҙең ни аңлатканын мөмкин тиклем тиҙерәк беҙгә яҙып ебәреү. Яуапты почта аша ла, телефон аша ла, интернет аша ла ебәрергә мөмкин. Тиҙлек йәһәтенән уларҙың төрлө булыуын иҫәпкә алып, редакция һәр юл менән килгән яуаптар араһынан да еңеүселәр билдәләйәсәк. Еңеүселәрҙе “Аманат” журналының маҡтау билдәләре көтә.




САЛАВАТ ЮЛАЕВ
хоккейный клуб

КХЛ




# ЕҘМЫЙЫҠ

**Бала саҡта был балыҡты беҙ, ауылды уртаға ярып үткән шишмәнең эре таштары аҫтынан эҙләп, күпләп тота торғайныҡ. Ташты иплəп кенә күтәрһәң дә, ул ҡаса һалып китмәй, боҫҡан һымаҡ ята бирә әле. Шул саҡта һалдау урынына ҡулланылған ябай сәнске менән елкәһенә генә – шап!...**

**Эргәләге Инйәрҙә ололар шундай уҡ ысул менән шамбыларҙы аулай торғайнылар. Беҙҙең дә уларға эйәреүебеҙ булғандыр инде. Хәйер, беҙҙең был ульябыҙ ҙа шамбынан бер ниһе менән дә айырылмай шулай уҡ таш аҫтында йәшәй, шулай уҡ мыйыҡлы, тик үтә бәләкәй – оло кешенең бармағы буйлыҡ ҡына. Дөрөҫ, ул балыҡты береһе лә ашар өсөн тотмай, беҙ тотҡандар ҙа тауыҡ-өйрәктәргә һәм бесәйҙәргә ашап кинәнергә китә ине. Инйәрҙә йүнлерәк балыҡтарҙы ҡармаҡлағанда беҙҙең яҡта ташбаш тип йөрөтөлгән был балыҡ та ҡармаҡҡа эләгеп сыҡҡылай, ул саҡта асыу менән ысҡындырып алынып, кире һыуға бәрелә.**

Аҙаҡтан мин был балыҡты (русса голец усатый) ҡомарлы балыҡсы, яҙыусы Сабир Шәрипов элеп ҡуйған белешмәлә “быларҙы тоторға ярамай” тигән исемлектә күрҙем. Һәм ғәжәпкә ҡалдым: бөтә ерҙә лә күпләп йәшәгән, үтә бәләкәй булыуы сәбәпле бер кемде лә ҡыҙыҡһындырмаған был балыҡты тотоу кемгә кәрәк булыр ине икән?

Еҙмыйыҡ – беҙҙең яҡтарҙың ғәҙәти балығы. Оҙонлоғо 12 сантиметрға етә, күпселектә таш аҫтарында йәшәй, шулай уҡ ләмле күлбыуаларҙа ла осрай . Үтә әрһеҙ булыуы сәбәпле, күпләп үрсеп китә ала, ҡыш көндәре һыуҙар үтәнән-үтә туңғанда йә йәйҙәрен шишмәләр кибеп бөткәндә лә ләмгә күмелеп тере ҡала. Минең, мәҫәлән, кибеп бөткән шишмәләрҙән уны ҡарғаларҙың сүпләп йөрөгәнен күргәнем бар. Тәңкәләре юҡ, русса исеме лә шунан алынған. Ауыҙ тирәһендә алты мыйығы була. Төҫө йәшәгән еренә ҡарап үҙгәрә, күпселектә ул һарғылт сыбар.

Еҙмыйыҡ һыуҙа йәшәгән төрлө бөжәктәр һәм башҡа балыҡтарҙың ыуылдырығы менән туҡлана, үрсегән быуаларҙа ул файҙалы балыҡтарҙың ыуылдырығын юҡ итергә лә һәләтле. Уның селбәрәһе аквариумда йәшәүгә яраҡлаша белә. Шулай уҡ уны башҡа йыртҡыс балыҡтарҙы тотоу өсөн ҡармаҡ еме урынына файҙаланалар, сөнки ул быуаларҙа, күлдәрҙә һәм йылғаларҙа күпселек йыртҡыс балыҡтарҙың ризығы булып хеҙмәт итә.

**Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ.**





Шамбы



Еҙмыйыҡ

# КӘШТӘ ЯҺАЙБЫҘ



а

**Театр кейем элгестән башлана, тиҙәр. Ә өйҙәге тәртип, йәғни, уҡыусының китаптары, дәфтәрҙәре, башҡа кәрәк-ярақтарының билдәле бер урында ҡуйылыуы, кәрәген тиҙ генә эҙләп табыу мөмкинлеге кәштәнән башлана. Хәҙер һатыуҙа уларҙың ниндәйе генә юҡ: матурлығына, ҡулайлығына ҡара ла, кеҫәң ҡалын икән, һат та ал. Ләкин беҙ махсус битебеҙҙең “Оҫтахана” икәнен дә, ошо кәштәләрҙә гелән “Аманат” журналы ятасағын да онотоп ебәрмәйек. Тағы шуны иҫтән сығармау мөһим: ябай кәштә эшләргә өйрәнеп, яһаған әйберең менән ата-әсәйеңде, туғандарыңды һөйөндөрөп ҡалыр саҡ әле һеҙҙең. Етмәһә, мебель яһаусы ағайҙар бүлмәгеҙҙең үҙенсәлеген дә, ҙурлығын да, һеҙҙең зауыҡты ла белеп бөтмәй. Быларҙың барыһы ла үҙ фантазияғыҙға, эшләй-эшләй оҫтарасаҡ ҡулдарығыҙға бәйле.**




б

Тәҡдим ителгән һыҙмалар ябай ғына кәштәләрҙең нигеҙе булып тора. Ҡалған элементтарын, биҙәктәрен өҫтәү эҙләнеү-табыштарығыҙҙан тора.

Ябай кәштә яһар өсөн ҡатламлы фанера, ДВП кәрәк буласаҡ. Шулай уҡ уны ҡалынырaҡ ДСП-нан да эшләп була. Ғәҙәттә, 5 мм-лы ике фанераны кәрәкле ҙурлыҡта киҫәләр. Был киҫәктәр кәштәнең аҫ һәм өҫ таҡталарын тәшкил итә. Әйтәйек, уларҙың киңлеген китап, дәфтәрҙән саҡ ҡына киңерәк алаһың, ә оҙонлоғон – 80-100 см. Ошо ике таҡтаның ҡырҙарына, артҡы өлөшенә 1 x 1 см, йәки 2,5 x 3 см ҡалынлыҡтағы рейкалар беркетәләр. Был рейкалар ҡағылған аҫҡы-өҫкө киҫәктәр ике яҡтан 25 x 35 см ҙурлыҡтағы терһәк фанералар менән беркетелә. Шулай итеп, кәштәнең дүрт яғы нығытыла. Артҡы өлөшөнә элгес ҡуйыла, ДВП менән ҡапланә.

Кәштәнең өлөштәрен үҙ-ара төрлөсә беркетергә мөмкин: ағас елеме лә ҡулланалар, шөрөп тә, өсмөйөшлө нығытыу материалдары ла.

Шулай итеп, кәштә әҙер. Биҙәүгә килгәндә, фанераның ағас төҫөн ҡалдырырға теләһәгеҙ, өҫтөнә бер нәмә лә йәбештермәйенсә, аҙ ғына шымартып, ағартып ебәреп, төҫһөҙ лак менән ҡаплаһағыҙ ҙа була. Шулай уҡ һатыуҙа төрлө шпондар, махсус мебель обойҙары ла күп. Йәнегеҙ ни теләй, шуны һайлап ала алаһығыҙ.

Әйткәндәй, хәҙер 2,5 см ҡалынлыҡтағы таҡтанан кәштә, кейем элгес һәм башҡа йыһаздар яһауға өҫтөнлөк бирелә башланы. Ысынлап та, материал урынына йүкә, уҫаҡ, ылыҫлы ағас таҡталары ҡулланһағыҙ, уларҙан төрлө әйберҙәр яһарға өйрәнһәгеҙ, бигерәк яҡшы. Берҙән, таҡтанан яһалған йорт йыһаздары ныҡлы була, икенсенән, тәбиғи матурлыҡ ниндәй генә “мода” заманында ла иҫкермәй.



в

“Ишек”ле кәштә ябайынан бер нимәһе менән дә айырылмай. Тик был осраҡта ДСП ҡулланыла. Яһау тәртибе шул уҡ ҡала. Ләкин алғы яҡҡа шыуҙырып асылыусы “ишек”тәр генә ҡуйыла. Быяла йөрөү өсөн пластмасса “эҙҙәр” ҡулланыла. Әйткәндәй, кәрәк-яраҡтың (нығытыу өсөн өсмөйөштәр, шөрөптәр, махсус сөйҙәр һ.б.) барыһы ла мебель йәки ауыл хужалығы тауарҙары магазиндарында һатыла. Ә “эҙҙәр”гә килгәндә, уларҙы әлеге шул нәҙегерәк рейкалар ярҙамында ла эшләп була. Пластмас “эҙҙәр” алһағыҙ, “Момент-монтаж” елеме менән йәбештерегеҙ. Шулай уҡ хәҙер “шыйыҡ сөй” (жидкий гвоздь) тигән елем дә бар. Әҙер кәштәгә шпон һәм махсус обойҙы йәбештергәндә ПВА ҡулланалар. Һуңынан мебель йәки төҫһөҙ лак менән буяйҙар.

**Рәлис УРАҘҒОЛОВ әҙерләне.**




14 йәш. Ҡыҙ. Үҙем тураһында таныш-ҡас һөйләрмен. 14-16 йәштәге ҡыҙ һәм егеттәр менән дуҫлашырға теләйем.

**Ғилманова Илүзә.**
**453490, Ауырғазы районы,**
**Яңы Ҡарамалы ауылы,**
**Көнсығыш урамы, 5.**
**Тел.: 89613675851.**
**ISQ: 491144158.**

***

Эльза – 12, Гөлшат менән Әлфиә 13 йәштә. 12-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәбеҙ.

**Саҙрыева Эльза.**
**452883, Аскын районы,**
**Ҡыйғаҙы ауылы,**
**Салауат Юлаев урамы, 51;**
**Исраилова Әлфиә.**
**Салауат Юлаев урамы, 42;**
**Әхмәтйәнова Гөлшат.**
**Салауат Юлаев урамы, 58.**

***

1997 йылдың 22 декабрендә тыуғанмын. Бейергә, йырларға, бәйләргә яратам. Тиҫтерҙәрем хат яҙһа ине.

**Бәхтейәрова Альмира.**
**453626, Әбйәлил районы,**
**Рауил ауылы,**
**Киров урамы, 38.**

***

14 йәш. Ылаҡ. 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки шылтыратыуҙар көтәм.

**Билалова Рушана.**
**453809, Хәйбулла районы,**
**Әбүбәкер ауылы,**
**Салауат Юлаев урамы, 30.**
**Тел.: 89371507916.**
**ISQ: 403758610.**

***

14 йәш. Һүрәт төшөрәм, китап уҡыйым. 14-16 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат көтәм.

**Дәүләтколова Әлиә.**
**453224, Ишембай районы,**
**Уразбай ауылы,**
**Сахалин урамы, 2.**
**ISQ: 582761049.**

***

14 йәш. Игеҙәктәр. Бейергә, китап уҡырға яратам. Кем минең менән дуҫлашырға теләй, хат яҙығыҙ.

**Аҡъюлова Райхана.**
**453909, Хәйбулла районы,**
**Әбүбәкер ауылы,**
**М. Ғафури урамы, 21.**
**Тел.: 89631309909**

***

11 йәш. 11-14 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙар менән дуҫлашҡым килә.

**Мөхәмәтнурова Айгөл.**
**452899, Аскын районы,**
**Иҫке Ҡарткиҫәк ауылы,**
**Болон урамы, 2.**

***

10 йәш. Шөғөлдәребеҙ – бейеү, бәйләү, китап уҡыу. 9-11 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хаттар көтөп ҡалабыҙ.

**Әхмәтова Гүзәлиә.**
**453652, Баймаҡ районы,**
**Ишмөхәмәт ауылы,**
**Батыр Вәлид урамы, 7/2.**
**Кәлимуллина Шәүрә.**
**Батыр Вәлид урамы, 3/2.**

***

14 йәш. Ылаҡ. 13-15 йәшлек ҡыҙ һәм егеттәрҙән хат йәки шылтыратыуҙар көтәм.

**Бәҙретдинова Эльвина.**
**452561, Мәсетле районы,**
**Тәкә ауылы,**
**Юбилей урамы, 8.**
**Тел.: 8 (34770) 2-70-01.**

***

11 йәш. 11-13 йәшлек ҡыҙ һәм малайҙарҙан хат көтәм.

**Яковлева Алина.**
**453387, Ейәнсура районы,**
**Сирғол ауылы,**
**Туғай урамы, 12.**

***

10 йәш. Тиҫтерҙәрем хат яҙһа ине.

**Ғәбйәлилов Әзиз.**
**453211, Ишембай ҡалаһы,**
**Стахановсы урамы, 18а-73.**
**Тел.: 89872582440.**

***

11 йәш. Үҙем хаҡында хатта яҙырмын. Йәштәштәремдән хаттар көтәм.

**Миңлекәйева Айгөл.**
**453620, Әбйәлил районы,**
**Асҡар ауылы,**
**Салауат Юлаев урамы, 11.**

*Ҡәҙерле дуҫтар! Ошо биттә яҡындарығыҙға, дуҫ-иштәрегеҙгә СМС-сәләмдәрегеҙҙе лә баҫтыра алаһығыҙ. Быны өсөн 3443 номерына смс ебәрегеҙ. Тик хәбәрҙе яҙғас, “Хат” префиксын ҡуйырға онотмағыҙ.*




# Һарысай һылыуы



“Һаумыһығыҙ. Мин Фидалиә Фәррәхова булам. 1993 йылдың 10 авгусында Туймазы районының Туҡай ауылында тыуғанмын. Өс йәшемдә Бәләбәйгә күсеп килдек. Ундағы башҡорт гимназияһында белем алам. Мәктәп тормошонда актив ҡатнашырға тырышам.

“Урал батыр”, “Аҡмулла вариҫтары” конкурстарында көс һынап ҡарағаным бар. 2009 йылда Президент шыршыһы байрамында ҡатнаштым. Президент стипендиатымын. IX синыфта рус әҙәбиәтенән тикшеренеү эшемдә уҡытыусым Регина Азат ҡыҙы Обнинск ҡалаһына ебәрҙе һәм был эшем өсөн беренсе урынға лайыҡ булдым. Музыка мәктәбен дә уңышлы тамамланым. Фортепиано, думбыра, ҡумыҙҙа уйнай беләм.

Маҡсатым – халҡыма файҙалы хеҙмәт итеү, уның ғөрөф-ғәҙәттәрен тергеҙеү, киләсәк быуынға еткереү.”



**Гөлфиә Юнысбаева. Баймаҡ районының Ҡаратал ауылынан:** “Йырларға, бейергә, бәйләргә, шиғыр һәм әкиәттәр яҙырға яратам. Киләсәктә илебеҙгә кәрәкле кеше булырыма ышанам.”



**Нурзидә Һеләүһенова. Йылайыр районының Йылайыр ауылынан:** “Шәйехҙада Бабич исемендәге башҡорт гимназияһында белем алам. Яратҡан шөғөләм: бейеү һәм йырлау. Төрлө конкурстарҙа ҡатнашып, призлы урындар яуланым.”



**Зилиә Әбсәләмова. Өфө ҡалаһынан:** “Киләсәктә журналист булыу теләге менән янып йәшәйем. Китап, гәзит-журналдар уҡыйым. Ғөмүмән, донъя яңылыҡтары, кәрәкле тапшырыуҙар минең өсөн ҡыҙыҡлы һәм фәһемле.”



**Рима менән Рита Ғәбиҙуллиналар. Мәләүез районының Аптраҡ ауылынан:** “Мәктәп тормошонда ла, йәмәғәт эштәрендә лә ихлас ҡатнашабыҙ. Сәнғәткә ғашиҡбыҙ, дүрт йәшебеҙҙән сәхнәлә бейейбеҙ.”

# КЕШЕГӘ ҠУШАМАТ ТАҒЫУ – ОЛО ГОНАҺ

**Борон-борондан халҡыбыҙ тәрбиәлелеге, әхләклелеге менән айырылып торған. Бер-береңә ҡушаматтар тағып әрепләшеү, бүтәндәрҙең шәхесен кәмһетеү кеүек йәмһеҙ күренештәр ят булған беҙҙең өсөн. Сөнки ата-бабаларыбыҙ оло гонаһ ҡылыуҙан ҡурҡҡан, әйләнә-тирәләгеләргә ихтирам менән ҡараған.**

Әҙәпкә әйҙәгән динебеҙ Исламда кешегә ҡушамат тағып үсекләшеү, уның тышҡы етешһеҙлектәренән көлөү ҡәтғи тыйыла. "Эй һеҙ, иман килтергән кешеләр! Бер халыҡ икенсе халыҡтан яҡшыраҡ булған хәлдә лә, уны мәсхәрәләп хурламаһын. Шулай уҡ, бер ҡатын икенсе ҡатынды (кәмһетмәһен), унан арыуыраҡ булғанда ла. Үҙ-үҙегеҙҙе хурламағыҙ, ҡушамат исем менән аташмағыҙ. Иманға килгәндән һуң "боҙоҡ" тип атау насар бит. Тәүбә итмәгән кеше залимдарҙан була" (49:11).



Мосолман этикетын боҙған туғыҙ насар ғәҙәттәрҙең береһе булыуына ҡарамаҫтан, ҡушамат тағыу мәктәп уҡыусылары араһында бик популяр. Балалар һәр бер китек күренеште эләктереп алырға ғына тора.

Психологтар билдәләүенсә, ҡушаматтар килеп сығышы буйынса бер нисә төргә бүленә:

– фамилияны йә исемде ҡыҫҡартып әйтеү;

– тышҡы, йәғни, физик үҙенсәлектәр;

– ассоциатив ҡушаматтар.

Ниндәй төргә инеүенә ҡарамаҫтан, һәр ҡушамат кешенең шәхесен кәмһетә, Аллаһ Тәғәлә биргәндән көлөү була. Кемделер кәмһетерҙән алда үҙеңдең етешһеҙлектәрең тураһында уйларға кәрәк. Беребеҙ ҙә бит бөтә яҡтан да камил заттар түгелбеҙ.

Һүҙ оло көскә эйә. Уның менән кемделер етенсе күккә күтәрергә лә, йәнен яраларға ла була. Хоҙайҙың уға бәләкәй, йә оҙон буй биргәнендә кешенең ғәйебе юҡ. Бер кем дә үҙ халҡын, буйһынын һайлап алмай. Күҙлек кейгән парталаш дуҫыңды "Ботаник" тип үсекләрҙән алда ныҡлап уйла: киләсәктә үҙең дә уның хәлендә ҡалмаҫһыңмы? Үҙ һүҙҙәрең өсөн яуап бирә белергә кәрәк. Иптәшеңдең ҡолағы ҡарпыш, алғы тештәре ҙур, аяҡтары кәкрерәк икән, был уны кәмһетергә хоҡуҡ бирмәй бит. Бер көн килеп үҙең тешһеҙ йә аяҡһыҙ ҡалһаң, һаңраулыҡҡа дусар булһаң, ни эшләрһең?

Ҡушаматтың бала шәхесенә, холҡона, үҙ-үҙен тотошона йоғонто яһауы билдәле. Ниндәйҙер ҡушамат йөрөткән бала уны тейешле итеп ҡабул итә. Был осраҡта Һәпрүш, Суска кеүек ҡушаматтарҙан арыныу бик мөһим. Йәмһеҙ ҡушамат таҡмаһындар өсөн үҙ-үҙеңде тәрбиәләп йөрөтөргә, әҙәпле һәм әхләкле булырға, башҡаларға ҡарата яҡшы мөғәмәлә күрһәтергә кәрәк. Насарлыҡҡа яҡшылыҡ менән яуап биреүселәрҙең һүҙе һәр саҡ өҫтөн. Башҡаларға ихтирам менән ҡараһаң, һине лә яратырҙар, рәхмәтле итерҙәр. Ә рәхмәтле кешеләр һәр төрлө гонаһтарҙан азат.

**Н. АЛСЫНБАЕВА әҙерләне.**





## Сабыр иткән – мораҙына еткән

“Аманат” журналын бәләкәй саҡтан алдырам, бигерәк тә “Мәңгелек сер”гә килгән хаттарҙы уҡырға яратам. Йәш йөрәктәр ҡыуанысын да, яуапһыҙ мөхәббәтен дә ошо рубрика менән уртаҡлаша. Күберәген ҡыҙҙар, егетем ташланы йәиһә ғашиҡ булған егетем мине яратмай, тип ҡайғыра.

Ҡыҙҙар, тирә-йүнегеҙгә әйләнеп ҡарағыҙсы әле, кем белә, бәлки, эргәндә генә берәү һине яратып, шундай уҡ яуапһыҙ мөхәббәт утында яналыр?

Кемдер, бәлки, был ҡыҙ үҙе яратып ҡарамағанға шулай фекер йөртә, тип уйлар? Әлбиттә, мин дә бер ваҡыт И. исемле егеткә ғашиҡ булдым, уны ғына уйлап йөрөнөм. Ә ул минең яратыуымды, уға булған хис-тойғоларымды белмәне лә. Бары тик яҡын дуҫҡа һанап йөрөй бирҙе. Хәҙерге көндә ул ҡалала уҡып йөрөй, яратҡан ҡыҙы ла бар. Мин дә үҙемдең мөхәббәтемде таптым, ул күрше ауылдан Ф. исемле егет. Ял көндәрендә күрешеп торабыҙ, телефондан һөйләшәбеҙ. Теге И. менән дә дуҫтарса аралашабыҙ.

Мин шуны аңланым: сабыр итеп көтә белһәң, мөхәббәт барыбер киләсәк. Кем өсөндөр айҙар, йылдар буйы ҡайғырыу, күҙ йәштәрен түгеү бушҡа ғына... Бары тик ғорур, аҡыллы һәм саф күңелле булып ҡалырға кәрәктер, тим. Беҙҙең бөтөн ғүмеребеҙ алда әле. Яҡты хискә, ысын мөхәббәткә ышанғандар ғына бәхетле булалыр, тигән фекерҙәмен.

**Барығыҙға ла саф мөхәббәт теләп, ЙОНДОҘ.**




## “Бөтөн мәктәп белә, көләләр...”

Мин дә үҙебеҙҙең мәктәптә, синыфта булған хәлдәр тураһында яҙырға теләйем. Эш шунда: беҙҙә малайҙар, берәй ҡыҙҙың кемгәлер ғашиҡ булыуын һиҙеп ҡалһа, исемдәрен ҡушып көлә башлайҙар. Ярай, унылына ғына түҙерһең дә. Тик бына стеналарға, парталарға, синыф таҡталарына һәм китаптарға яҙып ҡуйыуҙары бөтөнләй башҡа һыймаҫлыҡ хәл. Шуның арҡаһында беҙ, ҡыҙҙар, егеттәр менән йөрөй алмайбыҙ.



Ике йыл элек мин дә шундай хәлгә тарыным. Ул, мине яратам, тип әйткәс, мин дә уға запискалар яҙа башланым. Әммә синыфташтарым белеп ҡалғас, көлдөләр, хатта әле булһа беҙҙең исемдәрҙе ҡушып яҙыуҙы дауам итәләр. Ә бит уның менән бер нисә көн генә дуҫлашып йөрөнөк, һөйөү гөләбеҙ, сәскә атырға ла өлгөрмәйенсә, шиңде, һулып ҡуйҙы. “Һинең менән йөрөгөм килмәй,” – тигәс, мин унан сәбәбен һораным. Ул: “Беҙҙең йөрөгәнде бөтә мәктәп белә, көләләр...” – тип яуапланы. Мөхәббәттең ни ояты бар, кемделер һөйөү яҙыҡмы ни, дуҫтар? Һеҙҙән яуап көтәм.

**ЫНЙЫҠАЙ.**

## ӘЛЕ ЛӘ ҺАҒЫНАМ

Айырылышҡанға нисә көн?
Нисә ай булды икән?
Көн һайын һағынып көтәм,
Ҡабат күрешербеҙ микән?

Яратам, шикелле, һине –
Исемдәрең күңелдә.
Һин йыраҡта, хат яҙмайһың,
Ә мин көтәм-көтәм дә,

Бергә саҡтарҙы иҫләйем.
Оҙатып та ҡуйҙың гел.
Бергә булған минуттарҙы
Әле лә һағына күңел.

**Гөлгинә ШӘЙХИСЛАМОВА.**
**Баймаҡ районы,**
**Ҡаратал ауылы.**

## ЙӨРӘК ӘРНЕҮЕ

Төн. Ай йылмая.
Йондоҙ балҡый.
Ике ғашиҡ ҡайтып баралар.
Миңә моңһоу,
сөнки мин – яңғыҙ,
Йыраҡайҙы беҙҙең аралар.

**Сөмбөл ӘМИНЕВА.**
**Ейәнсура районы,**
**Күгәрсен ауылы.**

# Нимә ул интерактив таҡта?

Интерактив таҡта – һөйләүсе кеше ябай таҡтаны һәм видеоэкранды бер юлы файҙалана алһын өсөн уйлап сығарылған ҡулайлама. Ғәҙәттә, уҡытыусы теманы аңлатҡанда аҡбур менән таҡтаға яҙа, кәрәк булһа, плакаттар, схемалар элеп күрһәтә, һүрәттәр һәм фотоларҙы иһә, мөмкинлеге булһа, экранда күрһәтеп бара. Интерактив таҡта иһә быларҙың барыһын да бер экранда башҡарыу мөмкинлеге бирә. Ул башта компьютерға тоташтырыла, әммә компьютерҙағы материалдарҙы экранда сағылдырыу өсөн уның “сысҡаны” менән эшләргә кәрәкмәй, экран ҡул хәрәкәттәренә буйһона. Һөҙөмтәлә балалар дәрес буйы уҡытыусының күҙ алдында була, ул, материалды ҡабул итеү-итмәүҙәренә ҡарап, эш барышына үҙгәрештәр индерә ала. Был, бер яҡтан, уҡытыусының компьютер технологияларын үҙләштереүенә булышлыҡ итһә, икенсе яҡтан, заман техникаһын аҙым һайын осратып, уның менән эшләп өйрәнгән балалар өсөн дә дәрес барышын ҡыҙыҡлыраҡ итә.

Интерактив таҡта менән эшләргә өйрәнеү ҡыйын түгел. Эшләтеү программаһы ябай телефон менюһынан да ҡатмарлыраҡ түгел. Тик уны уңышлы файҙаланыу өсөн компьютерҙа етерлек материал булырға тейеш. Шунһыҙ интерактив таҡта дәрес бүлмәһендә тик торған ябай бер йыһаз ғына булып ҡаласаҡ. Тимәк, дәрестә интерактив таҡтаны ҡулланыу өсөн уҡытыусы компьютерҙы яҡшы белергә тейеш булып сыға.

Айырым предметтар һәм ҡайһы бер темалар буйынса интерактив таҡтаны файҙаланыуға иҫәпләнгән махсус программалар бар. Киләсәктә уларҙың һаны арта ғына барасаҡ. Хәҙерге быуын балаларына, тимәк, һеҙгә, уҡыусылар, өҫтәүенә, уны “башҡортлаштырырға” ла кәрәк буласаҡ әле. Сөнки башҡорт теле һәм әҙәбиәте, мәҙәниәте, тормош һабаҡтары дәрестәрендә лә интерактив таҡталар файҙаланылырға тейеш бит.







# “Ил ижады – аҫылташ”

## Ташөй эсендә

– Һә, бында шишмә ағып ята бит! – тип шатланып ҡысҡырып ебәрҙе Айнур мәмерйәнең дауам иткән яғына килеп кергәс тә. Аяҡ аҫтында сылтырап ятҡан саф һыулы кескәй генә ишешкә улар оҙаҡ ҡына ҡарап һоҡланып торҙо.

– Һалҡын ғына, – тине Илнур, услап һыуын эсеп ҡарағас. – Ҡайҙан килә лә, ҡайҙа аға икән был?

– “Өсдуҫ шишмәһе” тип яҙам, – тип инешкә исем дә бирергә өлгөрҙө Гөлнур. Уртаҡ килешеү буйынса, уға барған юлдарын ҡағыҙға төшөрөп барыу эше ҡушылғайны.

Мәмерйә барған һайын түбәнерәк төшә, әллә нисә тармаҡҡа бүленеп китә булып сыҡты. Әллә ни бейек түгел, ҡайһы бер ерҙәрендә түбәһенә ҡул тейеп тора хатта. Килешеү буйынса, балалар шишмә аҡҡан яҡҡа йүнәлергә ҡарар итте. Киләторғас, ул бер күләүеккә йыйыла булып сыҡты. Унынһы юлды ҡапланы. Үҙе һай ғына, әммә теге осо күренмәй, ут яҡтыһы етмәй.

– Кисеп сығып ҡарайыммы әллә? – тигән тәкдим индерҙе эҙәрмәнлек ҡомарына сумған Айнур.

– Кит, һыуы һыуыҡ та инде, – тип тыйҙы уны Гөлнур.

– Әйҙә, артҡа бара бирәйек тә, тағы берәй тармаҡты ҡарайыҡ, – тип аҡыллы фекер әйтте Илнур. – Сайырыбыҙ ҙа күп ҡалманы, сығырға тура килер. Ныҡлап әҙерләнеп, тағы килербеҙ әле.

– Берәй һандыҡ аҫылташ тапмайынса сығыу юҡ инде! – тип әллә шаяртты, әллә ысынлап өмөт-ниәтен белдерҙе Айнур.

– Ултыртып ҡуйғандар, ти, һин килерҙе белеп, – тип көлдө унан Илнур.

– Балыҡтар юҡ микән бында, иплэберәк ҡарайым әле, – тип Айнур сыраҡты һыуҙың өҫтөнән генә йөрөтә башланы. Хәс тә көҙөн йылғала сыраҡҡа төшкән һымаҡ инде. – Әһә, ниҙер бар һымаҡ бында!

– Нимә күрҙең?! – тип берҙәм ҡысҡырып




(Өмәнең дауамы. Шарты журналдың 4 – се һанында донъя күрҙе.)
















ебәрҙе Илнур менән Гөлнур.

Тик ошо ерҙә көтөлмәгән хәл булды. Күргән нәмәһен карарға тип һонолған Айнур бер аяғы менән һыуға төшөп китте, сырағы һыуға тейеп, “пыш” итеп кенә калды… Тирә-як дөм ҡараңғылыҡҡа сумды.

– Ай! – тип, Гөлнур эргәһендә торған Илнурға тотоноп ҡына өлгөрҙө. – Айнур, һин ҡайҙа?

– Шырпыңды сығар, Илнур, – тигән тауышы килде уның янда ғына. Сыҡмай булмай инде.

– Миндә шырпы юҡ таһа! – тип ғәжәпләнеп тә, аҡланып та өндәште Илнур. – Һин алғайның уны.

– Әй, шулай бит әле. Хәҙер, – тип ҡараңғыла һәрмәнгәне ишетелде Айнурҙың. Тик ул кеҫәһенән сығарған шырпылар тоҡанырға теләмәне. Еүешләнгән ахыры.

– Нишләйбеҙ инде хәҙер? – Гөлнур мышнап ҡуйҙы. Үтә ныҡ ҡурҡмаған булһа, илап та ебәрер ине ул, моғайын.

– Тәүҙә бер-беребеҙгә тотоношайыҡ, – тигән аҡыллы фекер әйтте башлыҡ Айнур. – Әл дә шишмә буйлап китергә баш еткән.

– Эйе ләһә, хәҙер шуның буйлап ҡына сығабыҙ яҡтыға! – тип шат ҡысҡырҙы Илнур. – Тик шишмәне ҡайҙан табабыҙ инде бында?

**(Дауамы бар)**






# “Сочи – 2014”кә кандидаттар

14-26 августа Сингапурҙа үткән Беренсе үҫмерҙәр олимпиадаһында Рәсәй йыйылма командаһы составында Башҡортостандан өс спортсы ҡатнашты: рапирист Кирилл Личагин (Олимпия мәктәбе), ауыр атлет Диана Әхмәтова (Нефтекама ҡалаһы) һәм бишуҙышсы Гөлназ Ғөбәйҙуллина (БДУ талибәһе).

14-18 йәшлек спортсылар 30 спорт төрө буйынса көс һынашты. Рәсәй йыйылма командаһы, ҡытайҙарҙан ҡала, икенсе урынға сыҡты. Киләһе йәйге уйындар 2014 йылда Ҡытайҙа үтәсәк.


Кирилл Личагин

Рапира (испан һүҙе – espadas roperas , тәржемәһе «кейем өсөн ҡылыс») – шпаганың бер төрө, был ҡылысты Элек Испанияла тик парадта кейгән мундирға ғына таҡҡандар шуның өсөн биҙәүес әйбере кеүек кенә ҡулланғандар.

Спорттағы рапира бөгөлмәле ҡылыс йөҙөнән, эфест, йәғни кәсәгә оҡшаған ҡулды һаҡлаусы гарданан һәм тотҡанан ғибәрәт.


Диана Әхмәтова

Ауыр атлетика – көс талап итә торған спорт төрө, был спорттың нигеҙендә баш өҫтөнә ауыр штанганы күтәреү тора.




Гөлназ Ғөбәйҙуллина

Хәҙерге заман бишуҙышы биш төрлө спорт дисциплинаһын үҙенә ала: конкур, фехтование, атышыу, йүгереү, йөҙөү. Ул шулай уҡ ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар бишуҙышы бүленә. Уны греция олимпия уйындарындағы уҙыштан, йәғни пентатлондан айырыу өсөн хәҙерге заман бишуҙышы тип атала. Боронғо бишуҙышы эсенә йүгереү, диск ташлау, һөнгө ташлау, бейеккә һикереү һәм көрәш.



Ейәнсура районы Башҡортостандың көньяғында, Ырымбур сигендә урынлашҡан. Ә районға исем биргән Ейәнсура ауылы элекке СССР территорияһын административ бүлгеләүҙәр ваҡытында хәҙерге Ырымбур өлкәһендә тороп ҡалған. Район үҙәге – Иҫәнғол ауылы. Ейәнсураның 83 ауылында 28 мең кеше йәшәй.



Райондың гербында дүрткә бүленгән көмөш һәм йәшел фонда зәңгәр түңәрәк эсендә күккә ынтылған алтын суҡышлы көмөш торна һыны һүрәтләнгән. Торна – тыуған ергә тоғролоҡ, юғары рух символы. Уның юғарыға талпыныуы алға, киләсәккә ынтылышты, ҡаршылыҡтарҙы еңә белеүҙе сағылдыра. Йәшел төҫ райондың экологик яктан таҙалығын, байлыҡ-муллыҡ һәм тыныслыҡты күрһәтә.



Гербтың дүрт мөйөшөндә Үҫәргән ырыуының тамғалары урынлашҡан.

2006 йылда ҡабул ителгән.

Авторы Салауат Ғиләжетдинов.



5 октябрь – Уҡытыусы көнө

# БАШҠОРТОСТАНДА МОСОЛМАН МӘКТӘПТӘРЕ

**Бөйөк ғалимыбыҙ Ризаитдин Фәхретдинов үҙенең яҙмаларында Башҡортостанда мосолман мәктәптәренең барлыҡҡа килеү ваҡытын XVI быуат тип күрһәтә. Ул саҡтағы мәктәптәр күп йәһәттән Исламда традицион булған дини мәктәпте – мәҙрәсәне ҡабатлай һәм уның төп маҡсаты балаларҙы дини-әхлаҡи яҡтан тәрбиәләү була.**

Мәҙрәсәләр, ғәҙәттә, мәсет эргәһендә асылған һәм мосолман руханиҙары ҡарамағында ойошҡан. Уҡытыусылыҡ эшмәкәрлеген муллалар башҡарған. Матди яҡтан мәктәптәр һәм мәҙрәсәләр урындағы халыҡ иҫәбенә көн күргән, шуға ла улар тәү сиратта халыҡ уҡыу йорттары булып иҫәпләнгән. Бындай уҡыу йорттары сәйәси тормошта ла үҙ ролен үтәй. Ҙур мәҙрәсәләр күп осраҡта колониализмға ҡаршы ҡарашлы белем эйәләрен үҙе эргәһендә туплаған. XVIII быуатта бер-бер артлы тоҡанған башҡорт ихтилалдарының етәкселәре нәҡ улар араһынан сыҡҡан да инде. Шуға ла батша хөкүмәте мәктәптәр, мәҙрәсәләр һанын сикләгән, уларҙы ҡыҫыу өсөн төрлө саралар күргән. Ихтилалдар баҫтырылғандан һуң күп мәктәптәр юҡҡа сыҡҡан, мосолман руханиҙары (ахундар, муллалар), мәҙрәсә мөдирҙәре (мөҙәристәр), уҡытыусылар (мөғәллимдәр), абруй ҡаҙанған белем эйәләре (абыҙҙар) ҡаты эҙәрлекләүҙәргә дусар ителгән.

XIX быуаттың беренсе яртыһында Башҡортостан Рәсәйҙең Көнсығышында мосолман мәғрифәте үҙәгенә әйләнә. Бында ҙур мәҙрәсәләр эшләй. Ҡайһы берҙәренең даны хатта сит илдәргә лә тарала. Стәрлетамаҡ өйәҙенең Стәрлебаш ауылы, Ырымбур өйәҙенең Сәйет биҫтәһе, Өстамаҡ (Троицк) ҡалаһында мәҙрәсәләре киң танылыу яулай.

XVIII быуатта Башҡортостанда урыҫ телле уҡыу йорттары барлыҡҡа килә. Улар хөкүмәт тарафынан, урындағы власть өсөн кәрәкле кадрҙар булдырыу маҡсатында барлыҡҡа килә. Дәүләт мәктәбе аҡһөйәктәр сословиеһын булдырырға ынтыла.

1884 йылда Ырымбур губернаһының Өстамаҡ (Троицк) ҡалаһында «Рәсүлиә» мәҙрәсәһе асыла. Уны билдәле башҡорт дин әһеле Зәйнулла ишан Рәсүлев ҡаҙаҡ байы Алтынһарин аҡсаһына нигеҙләй. Беренсе йылдарҙа мәҙрәсәлә күбеһенсә дини дисциплиналар уҡытыла. Зәйнулла ишандың яңыса уҡытыуға, йәғни йәҙитселеккә ҡоролған мәҙрәсәһе XX быуат башында танылған уҡыу йортона һәм Көньяҡ Урал башҡорттарының дини тормошо үҙәгенә әйләнә. Уҡытыу программаһы дини тәғлиматтарҙы өйрәнеүҙе, урыҫ, ғәрәп, төрки телдәрен, матур яҙыу дәресен, Ҡөрьәнде һәм хәҙистәрҙе уҡыу, ятлау һәм һөйләүҙе, математика, Рәсәй, төрөк һәм дөйөм тарихты, ислам тарихын, изге тарихты, теологияны, мосолмандар хоҡуғын, этиканы, гигиенаны, географияны, тәбиғәт ғилемен, физиканы, химияны, зоология һәм педагогиканы үҙ эсенә ала.



1913 йылда «Рәсүлиә» мәҙрәсәһендә 13 мөғәллим эшләй, 240 шәкерт белем ала. Мәҙрәсә иғәнә ярҙамында тәьмин ителә. Меценаттарҙың, шулар араһында Зәйнулла ишандың, матди ярҙамы менән ике төп йорт һатып алына. Дөйөм алғанда, Зәйнулла ишан уҡытыу системаһына 19 мең һум аҡсаһын сарыф итә.

XX быуат башында уҡытыу йылына 8 һум тәшкил итә. Мәҙрәсәләге бай китапханаға Зәйнулла Рәсүлев баһалап бөтөргеһеҙ китап коллекцияһын һәм 3,5 мең аҡсалыҡ капиталын васыят итә. Мәҙрәсә 1919 йылда, Совет власы килгәс, ябыла.

1906 йылда Өфөлә «Ғәлиә» мәҙрәсәһе асыла. Уның да уҡыу корпусы меценаттарҙың аҡсаһына төҙөлә. Уҡыу йортонда Ислам тарихы һәм философияһы, Ҡөрьән өйрәтелә, уҡытыу ғәрәп, фарсы, урыҫ, татар телендә алып барыла. Математика, физика, химия, биология, педагогика, психология, дидактика, матур яҙыу дәрестәренә лә шундай уҡ иғтибар бирелә. «Ғәлиә»лә башлыса Мысырҙа, Сүриәлә, Төркиәлә белем алған билдәле ғалимдар һәм дин белгестәре эшләй. Улар башҡорт, татар, ҡаҙаҡ, үзбәк шәкерттәрен уҡыта.

1913 йылда мәҙрәсәлә 94 уҡыусы һәм 20 ирекле тыңлаусы белем ала. Мулла, крәҫтиән, сауҙагәр балалары бында түләп уҡый.

**Айһылыу АБДУЛЛИНА әҙерләне.**
**С. Юлан фотоһы.**

# СКАНВОРД





Пляждағы теннис
Рәссам ҡоралы
Атайҙың атаһы
Ат төҫө
Еүешлек
Саҡ ҡына йыраҡ
Көүҙә
Намаҙға саҡырыу
Киндер туҡыма
Йәмән аҡсаһы
Мультик бәһлеүәне
Тау юлы
Арт һан
Тупраҡ
Башҡортостан
Ризыҡ
Комиссар эт
Ер үлсәме
Һоҡланыу ымлығы
Шартлы аҡса
Мифик зат
Тегә йә был ...
Башҡорт ырыуы
Телеканал
Ныҡыш маллыҡ
Бармаҡ үлсәме
Авторемонт урыны
Ҡармаҡ төрө
Хайуан балалары
Малай үҫкәс
Ҡапҡасы Яшин
"Аманат" йондоҙлого
Күсәнле йәшелсә
Алайҙың ире
Тиҫтә

## СПОРТ

Урман тауығы
Ишембай районы, ауыл
Йәлләд ҡоралы
Тимер арҡан
Мадрид клубы
Билдә йораты
Йоҡлатҡыс вагон
Ҡатын дар енесе
Дәүләт ярҙамы
Йылҡы малы
Киске намаҙ
Һөт сығанағы
Эстрада төркөмө
Түбә ябмаһы
Ҙур йылға
Яратҡан ярты
Нота
Буяу
Энә эше
Тән ағзаһы
Күбәләк елпеүе
Һауа флоты
Йыртҡыс ризығы
Арҡыры бау
Һуғышсан планета
Эш оҫтаһы
Совет армияһы
Бороно го таҡта
Шишмә
Мәйет Идара пункты
Дүрткел йәшник
Француз архитекторы
Йәнһеҙ нәмә
Күлдең төпрәһе
Иҫәпһеҙ-һанһыҙ
Маңлай сәсе
Һигеҙ аяҡ
Оло
Менән (иҫк.)
Баянсы Фәсхетдинов
Һыу яны ҡошо
Баяндан была йыраҡ





# Көләмәстәр

**Уҙған быуаттың етмешенсе йылдарында балаларға былай аңлата торған булғандар:" Диод ул – баҙлауыҡ һымаҡ ҡараңғыла яна торған радиодеталь була". Бөгөн иһә балаларға былай аңлаталар:" Баҙлауыҡ – диод һымаҡ ҡараңғыла яна торған ҡорт".**

* * *

– Алло, был – зоопаркмы?

– Эйе.

– Һеҙҙең телефонды миңә ҡотҡарыусылар бирҙе. Ихатамда ҙур йылан ята!

– Һеҙ ҡырағай хайуандарҙы һаҡлау йәмғиәте ағзаһымы?

– Юҡ.

Йәшелдәр партияһында тораһығыҙмы?

– Юҡ.

– Улайһа, бәрегеҙ ҙә үлтерегеҙ!

* * *

**Һатып алыусы:**

**– Һеҙ миңә 200 грамм колбаса үлсәп бирмәҫһегеҙме?**

**– Был хужалыҡ тауарҙары кибете, тиһәм, ҡыйын булмаҫмы?**

**– Булмаҫ, булмаҫ!**

**– Ярай, килтер колбасаңды, һал үлсәүгә!**

* * *

Уҙған йәйҙең эҫелегенә бәйле, халыҡта һалҡынға яңы аңлатма барлыҡҡа килде:"Бөгөн һыуыҡ ул – плюс 30 градус ҡына!"

* * *

**Силәбе урмандарында 300 йыл йәшәгән ташбаҡа табылған. Әгәр уны тапмаған булһалар, тағы нисә йыл йәшәрә белгеһеҙ ҡалыр ине.**

* * *

– Почтаңа нисек инергә? Пароле ниндәй?

– Паролһеҙ.

– Асылмай бит!

– "Паролһеҙ" тип инглизсә яҙырға кәрәк.

**Тышлыҡта –**
**Рәмил Килмәмәтов фотоһы.**


# АМАНАТ ©

**Республика балалар-үҫмерҙәр журналы**

**Республиканский детско-юношеский журнал**

**№ 09 (802), Сентябрь, 2010**

Ойоштороусылары: Башҡортостан Республикаһының «Аманат» журналы редакцияһы ҡаҙна предприятиеһы һәм Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте ҡарамағындағы Матбуғат, нәшриәт һәм полиграфия эштәре буйынса идаралыҡ.

Учредители: Казенное предприятие Республики Башкортостан Редакция журнала «Аманат» и Управление по делам печати, издательства и полиграфии при Правительстве Республики Башкортостан.

**Баш мөхәррире – Сәлмән ЯРМУЛЛИН**

Мөхәрририәт:
Артур СУРИН, Розалия САБИРОВА, Азамат ЮЛДАШБАЕВ, Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА, Айһылыу АБДУЛЛИНА (баш мөхәррир урынбаҫары), Дамир ШӘРӘФЕТДИНОВ (яуаплы сәркәтип), Нурия ӘХТӘМОВА (бүлек мөхәррире), Артур ТАПАҠОВ (биҙәлеш мөхәррире).

1929 йылдың мартынан нәшер ителә.
Айына бер тапҡыр башҡорт телендә сыға.
Урта һәм оло йәштәге мәктәп балалары өсөн.
Издается с марта 1929 года.
Выходит один раз в месяц на башкирском языке.
Для детей среднего и старшего школьного возраста.

Киң коммуникациялар, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау даирәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт тарафынан 2007 йылдың 21 декабрендә теркәлде.

Журналды теркәү тураһында таныклыҡ ПИ № ФС77-30612

Зарегистрирован Федеральной службой по надзору в сфере массовых коммуникаций, связи и охраны культурного наследия 21 декабря 2007 года.

Свидетельство о регистрации ПИ № ФС77-30612

БЕҘҘЕҢ АДРЕС:
450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2. «Аманат» журналы редакцияһы.
450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2. Редакция журнала «Аманат».

ТЕЛЕФОНДАР:
баш мөхәррир – 277-73-46; яуаплы сәркәтип – 277 – 74 – 80; компьютер бүлеге – 223 – 91 – 83
e-mail: amanat@yandex.ru
Беҙҙең сайт: http://www.journal-amanat.ru

РЕКВИЗИТТАР:
г. Уфа, ИНН 02 78 02 12 11, КП РБ Редакция журнала "АМАНАТ"
р/с 40602810700000000017, в филиале ОАО "УралСиб",
к/с 30101810600000000770 БИК 048 073 770

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһында баҫылды.
Адресы: 450001, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрь проспекты, 2.
Отпечатано в Государственном унитарном предприятии Республики Башкортостан «Уфимский полиграфкомбинат».
Адрес: 450001, Республика Башкортостан, г.Уфа, проспект Октября, 2.

Редакция һеҙҙән килгән хаттарҙы иғтибар менән ҡарай, яҙышып тороуығыҙ өсөн шатлана. Әммә һәр берегеҙгә яуап бирә алмай. Беҙҙең материалдарҙы файҙаланғанда «Аманат» журналына һылтаныу мотлаҡ.

Баҫырға ҡул ҡуйылды 07.09.2010. Ҡағыҙ форматы 84х108 $^{1}/_{16}$. Офсет ысулы менән баҫыла. Күләме 2,25 баҫма табаҡ, 6,05 иҫәп-нәшриәт табағы. Тиражы 11470. Һатыуҙа – хаҡы ирекле. Заказ № 2.0125.10.

Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.




Атай барам тине бөгөн
Баш ҡалаға, Өфөгә.
Мин дә ҡала күрәм, тиеп,
Яттым сумка эсенә.

**Айсинә Йосопова.**
**Бөрйән районының**
**Байназар ауылы.**





Тәгәрмәс –
ҡалҡыуыстарҙың
Беҙгә файҙаһы тейә:
Һис ҡурҡмайынса төшәбеҙ
Һыуҙың иң тәрәненә!

**Дания Насирова.**
**Әбйәлил районының**
**Әбделмәмбәт ауылы.**



# Ни булыр был?

Журналыбыҙҙың июль һанында ошондай конкурс иғлан итеп, беҙ ҡыҙыҡлы фотоға үҙегеҙҙең аңлатмағыҙҙы ебәреүегеҙҙе үтенгәйнек. Был юлы уға килгән яуаптарҙы баҫабыҙ һәм яңы фотоһүрәт тәҡдим итәбеҙ.

Ейәнсура районының Мәжит ауылынан Рәфис Ҡуйбағаров үҙенең ҡыҫҡа хикәйәһен “Ғәжәп хәл” тип атаған. Тик ул уйлап сығарған хикәйәнең фотоһүрәттә күрһәтелгән осраҡҡа ҡағылышлығы юғыраҡ, шикелле...

Мәсетле районының Иҫке Мишәр ауылынан Нәзир Кәримов был сәйер һүрәтте ошолайыраҡ аңлатып ҡарай: “Беҙ походта ял иткәндә, осраныҡ барыһына: ҡондоҙҙар ярҙамы менән Әйҙә күпер һалына...”; “Ағасты ырыу – бик шәп шөғөл!”



Беҙҙең вернисаж

## Минең республикам!

Сәләм, “Аманат”!

Беҙ, Өфө ҡалаһы Совет районының 27-се урта дөйөм белем биреү мәктәбе уҡыусылары, һине бик яратып уҡыйбыҙ. Һәр һаныңды түҙемһеҙлек менән көтөп алабыҙ. Ундағы тиҫтерҙәребеҙ ижады, мауыҡтырғыс башватҡыстар, тарихи материалдар, “Мәңгелек сер”, “Тамырҙарыңды бел”, “Айһылыу”, “Илем буйлап” рубрикалары күңелгә яҡын. Беҙ ҙә үҙебеҙҙе “Минең республикам” конкурсында һынап ҡарарға булдыҡ. Һиңә уңыштар, ижади үрҙәр теләп ҡалабыҙ. Ҙур рәхмәт һиңә!

**1. “Һыҙылып ҡояш батҡанда”.** Фәриҙә Шәрипова. 7-се синыф.

**2. “Көҙгө түңәрәк күл”.** Айгөл Әһлиуллина. 5-се синыф.

**3. “Тәбиғәт хозурлығы”.** Роман Латыпов. 6-сы синыф.

**4. “Һыуһылыу”.** Айгөл Әхмәтйәнова. 5-се синыф.

**5. “Һылыу ҡыҙҙарға бай илем!”.** Элина Ғәлимшина. 3-сө синыф.

**6. “Бөтәһе яҡын һәм ҡәҙерле”.** Артур Сәмиғуллин. 4-се синыф.


1


2


4


3


5


6



Аманат, № 09, 2010 йыл